✓ *Ҡартлыҡ бәхетле була алмай. "Бәхетле ҡартлыҡ" тигәнде әллә ниндәй йүнһеҙе уйлап сығарған. Ҡартлыҡ тыныс, йә ҡайғы менән тулы булырға мөмкин. Кеше хөрмәткә лайыҡ булһа, уның ҡартлығы тыныс үтер. Әгәр уны онотһалар, ташлаһалар, яңғыҙлыҡта тилмерер.*

***(В. Сухомлинский).***

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2013

5 - 11 ҒИНУАР (ҺЫУЫҒАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№1 (523)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Буласаҡҡа сара юҡ...**



3

**Ҡаҙанына ни һалһаң...**

ҡалағында шул булыр



5

**Тамуҡтан һуң...**

"айыҡлыҡ" тигән ожмахҡа юлыҡтым



6

**Йыланға ярап булырмы?**



12-13

14 ТВ-программа

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Яңы йылдан яңы эштәр, яңы тормош башларға ниәтләйһегеҙме?

***Әминә ЯХИНА, инженер-химик, драматург:*** Яңы йыл - үҙе бер мөғжизә. Балалар ғына түгел, хатта ололар ҙа яңы йылдан ниндәйҙер мөғжизә көтә. Бик күптәр яңы йылдан яңы тормош башларға уйлайҙыр йәки өмөтләнәләр. Бигерәк тә һуңғы йылдарҙа йондоҙнамәгә ышаныусылар күп. Яңы йылды нисек ҡаршылайһың, тотош йылың шулай була, тигән ҡараш та бар бит әле халыҡ араһында. Мин аңлайым, мөғжизәләр үҙенән-үҙе генә барлыҡҡа килмәй, ләкин ҡайһы ваҡытта хыял донъяһына сумыу күңелдә ниндәйҙер өмөт саткылары уята, йәшәүгә дәртте арттыра.

Ә инде яҙыусыларға, шағирҙарға, хыял донъяһында йөҙмәйенсә, яҡшы әҫәр ижад итеүе мөмкин дә түгелдер. Тормошта мин практикмын, һәр нәмәне алдан уйлап, планлаштырып йәшәргә күнеккәнмен. Бәлки, быға минең оҙаҡ йылдар производствола эшләүем, техник һөнәр эйәһе булыуым сәбәпселер. Ә бына әҙәбиәт өлкәһенә килгәндә, бар нәмәне алдан планлаштырып булмайҙыр, тигән фекерҙәмен. Минеңсә, әллә күпме "һәүетемсә" әҫәр яҙғансы, халыҡ күңеленә үтеп инерлек һәм уларҙың йөрәктәрен тетрәтерлек берәү булһа ла берәгәйле әҫәр ижад итеү хәйерлерәк.

Яңы йыл, минә яңы әҫәрҙәр яҙырға ярҙам ит, тип өмөтләнеү генә аҙ. Яҙыусынан тормош һәләт тә, тырышлыҡ та талап итә. Шул уҡ ваҡытта, яҙыусы эше тиҙ генә баһаланмай, уның аша матди мәсьәләнде лә хәл итеп булмай, шуның өсөн сабырлыҡ һәм түҙемлек кәрәк. Күрәһең, беҙ күңел талабына буйһоноп ижад итәбеҙ. Ваҡытында Салауат, Арғаяш, Сибай театрҙарында "Еҙ беләҙек", "Аҡҡошом минең", "Ҡайырылмаһын ҡанаттар" тигән драма әҫәрҙәрем сәхнәгә ҡуйылды. Әлеге көндә Сибай халыҡ театрында "Йән һөйгәнем һин генә" исемле комедия әҫәре сәхнәләштерелә, ә "Сулпан" балалар театрында "Юл ҡағиҙәләре әлифбаһы"бара.

Ижад донъяһына мөнәсәбәтем буларак, мин дә яңы йылға бик ҙур булмаһа ла, яңы маҡсаттарға өлгәшеү хыялы менән йәшәйем. Яңы пьесалар ижад итергә, балалар өсөн пьесалар яҙып ҡарарға тигән теләгем бар, шулай уҡ үҙемде проза өлкәһендә лә һынап ҡарарға ниәтләнәм. Яңы йылдан - яңы тормош, тигәндәй, ошо маҡсаттарҙы үҙемә юлдаш итеп алыр инем: иң тәүҙә үҙемә иғтибарҙы арттырырға ( минә генә барыһын да ҡурсалап йәшәргә тимәгән!). Дәүләтебеҙ, аныҡлабыраҡ әйткәндә, хөкүмәт тарафынан яҙыусыларға ҡараштың ыңғай яҡка үҙгәреүен дә бик теләр инем.

***Барый ВӘЛИУЛЛИН, хеҙмәт ветераны, пенсионер:*** Яңы уй-хыялдар һәм пландар ҡороп йәшәү ул йәштәргә хас нәмә лә бит, ләкин, уйлап ҡараһаң, изге ниәттәр менән яҡшылыҡҡа ынтылып, матур, йөкмәткеле тормошҡа өмөт итеп йәшәү бер кемгә лә тыйылмай, шулаймы? Әлбиттә, яңы тормош башларға, бөтәһен дә хәҙер килеп үҙгәртеп ҡорорға әле һуң инде. Ә бына ысынлап та бөтәһен дә яңынан башлау мөмкинлеге бирелһә, мин уҡырға, белем алырға тырышыр инем. Ә былай, ауылдан килеп, ГПТУ-ға индем дә, токарь һөнәренә эйә булып, ғүмер буйы заводта эшләнем. Инженер булырға ине хыялым, заводта эшләгәндә лә ситтән тороп уҡып, күп нәмәгә өлгәшергә була ине, ләкин ғаиләле лә, аҙағыраҡ, бик оҙаҡ сират көтөп, фатирлы ла булып алғас, хыялдар онотолдо: күңелде тормош юшҡыны, ваҡ мәшәҡәт баҫты... Үкенмәйем шулай ҙа, еңгәгеҙ менән яҡшы йәшәнек, шөкөр, әле лә шулай. Икебеҙҙең пенсия етеп тора. Ике ул, бер ҡыҙ үҫтерҙек, улар өсөһө лә юғары белемле, һөнәрҙәре буйынса эшләйҙәр. Ейән-ейәнсәрҙәр бар. Донъябыҙ түңәрәк һымаҡ, ләкин шундай бер осор булып алды: үлтереп эс боша, буштан ғына күңел һыҡрай. Беҙҙең йәштә була торған халәт, бынаһын аңлай инем, ә шулай ҙа ни ҡылырға ла белмәнем. Ғүмерҙә ауыҙға алмағанды эсеп тә ҡарайым - юҡ, баҫылмай күңел. Әлеге шул ҡарсығыма рәхмәтлемен: үҙе менән эйәртеп, мәсеткә алып барҙы бер. Башҡалар менән ултырып, доға ҡылдыҡ, вәғәз тыңланыҡ, хәйерсаҙаҡа тараттыҡ. Бер барҙыҡ, ике барҙыҡ, хәҙер мәсет юлын һыуытҡаныбыҙ ҙа юҡ. Шулай йыл самаһы ваҡыт үтте, күңелемдә ҡуйырған теге ҡара болот та үҙенән-үҙе әкренләп тарала башланы, собханалла. Эске донъям, уйҙарым таҙарынып, рухым күтәрелеп китте. Әбейем менән икебеҙ ҙә намаҙға баҫтыҡ, Аллаһыбыҙ мәрхәмәтенә һыйындыҡ. Киләһе йыл, насип итһә, хаж ғәмәле ҡылырға тигән изге ниәттә торабыҙ, иншалла.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*ҒАИЛӘ ҠОРО*



Вәлиевтар тураһындағы материалды 8-9-сы биттәрҙә уҡығыҙ.

БАШ ЙОРТТА...

## Яңы йылдан яңы эштәр, яңы тормош башларға ниәтләйһегеҙме?

(Башы 1-се биттә).

***Артур БАТЫРШИН, "Киске Өфө" гәзитенең программалаусы инженеры:*** Яңы тормош башлау тигән һүҙҙәрҙе беҙ йыш ҡына Яңы йыл байрамдарында, тыуған көн тантаналарында әйтәбеҙ. Ҡайһы саҡ беҙ үҙебеҙгә, иртәгәнән яңы тормош башлайбыҙ, иртән тороп физик күнекмәләр эшләй, спорт менән шөғөлләнә башлаясаҡбыҙ, тип вәғәҙәләр биреп йоҡларға ятабыҙ. Әлбиттә, бик шәп һәм кәрәкле ниәттәр. Үкенескә күрә, йоҡлап тороуға, был вәғәҙәләребеҙҙе онотабыҙ, йә булмаһа, уларҙы тағы ла һуңғараҡҡа кисектерәбеҙ. Яңы йыл менән дә, тыуған көндәр менән дә, яңы тормош башлау ниәте менән дә шундай уҡ хәл. Беҙ үҙебеҙҙең бына хәҙер тотоп башҡара торған эштәрҙе билдәһеҙ ваҡытҡа - дүшәмбенән, икенсе аҙнанан, киләһе айҙан, Яңы йылдан, тыуған көндән һуңғараҡҡа шылдырабыҙ.

Ә беҙгә хәҙер бына ошо минуттан яңы, һау, сәләмәт тормош башлауға нимә ҡамасаулай һуң? Иң беренсе сәбәп - ул ялҡаулыҡ. Был айырыуса йәш быуын вәкилдәренә хас. Улар, ғәҙәттә, ниндәйҙер көс түгеп, үҙҙәрен камиллаштырыу буйынса эшләргә теләмәй. Уйларға ла, уҡырға ла, фекерләргә лә, аңларға ла теләмәй - барыһы ла рәхәт кенә һауанан килеп төшөргә тейеш, тигән кеүек йәшәйҙәр. Әлбиттә, уларҙы ғына ғәйепләп тә булмай бында. Йәштәр, бәлки, тырышыр ҙа ине, ләкин уларҙың күбеһе ҡайҙа табан ниндәй юл менән барырға белмәй, был тормошта үҙенде нисек табырға, күрһәтергә һәм раҫларға белмәй.

Шулай итеп, беҙ икенсе сәбәпкә килеп тәртәләбеҙ - ул йәмғиәтебеҙҙе алға этәреүсе, уның рухи үҫешен тәьмин итеүсе идеологияның булмауы. Ысынында иһә, хәҙер ҡайҙа, кемгә ынтылырға, кемгә тиңләшергә икәнде, нимәнең яҡшы, ә нимәнең насар икәнлеген йәш быуын аңлап та етмәй. Хәйер, дәүләткә лә хәҙерге заманда беҙҙең уйлы-ғәмле булыуыбыҙ кәрәкмәй. Әйткәндәй, күп кенә яңы йүнәлештәр барлыҡҡа килә - диндә булһынмы ул, йәштәрҙең тормош рәүешендә булһынмы...Былар барыһы ла йәмғиәтебеҙҙең өҫкормаһы - камиллыҡҡа, үҫешкә, матурлыҡҡа, изгелеккә ынтылдырыусы идеологияһы булмауҙан килеп сыға. Шуның өсөн дә өлкән быуын вәкилдәре быуындан-быуынға күсә килгән аҡылды йәштәрҙең иҫенә йышыраҡ төшөрөргә, аңлатырға, өйрәтергә тейештәрҙер, тип уйлайым. Шул уҡ ваҡытта йәштәр ҙа үҙҙәренең амбицияларын ситкә ҡуйып, оло быуын вәкилдәре һүҙҙәренә ҡолаҡ һалып, шул аҡылдың иң мөһимдәрен генә һайлап алып, шулар менән "ҡоралланып", яңы тормошто бына хәҙер, ошо минуттан һис кисектермәй башларға тейеш, тигән фекерҙәмен.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БАЛА-САҒАНЫҢ...



## ҡар бәреш уйыны кеүек был

**Йыл аҙағында Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаттары күпселек тауыш менән американдарға Рәсәй балаларын уллыҡҡа алыуҙы тыйыусы закон ҡабул итте. Закон 2008 йылда АҠШ-та үгәй атаһы Майлз Харрисон тарафынан 50 градус эҫе көндә 9 сәғәткә машина эсендә бикле ҡалдырыуҙан үлгән Дима Яковлев тигән малайҙың исеме менән аталды.**

Был Америка граждандары тарафынан тәрбиәгә алынған тәүге һәм бер-ҙән-бер баланың үлеме түгел, үкенескә ҡаршы. Һуңғы ун йылда тукмалыуҙан һәм көс ҡулланыуҙан 19 бала үлемгә дусар ителгән булһа, өҫтәүенә, бәхетһеҙлек осраҡтары һәм ауырыу һөҙөмтәһендә һәләк булғандары ла бар. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Америка "Фемидаһы" ла, Рәсәй йәмәғәтселеге лә (киң мәғлүмәт сараларында яҡтыртылған материалдарҙы иҫәпләмәгәндә) был проблемаға сағыштырмаса тыныс ҡараштa булды. Әле килеп, Америка граждандарына Рәсәйҙән етем, ҡараусыһыҙ ҡалған балаларҙы уллыҡҡа биреүҙе тыйыу тураһында закон ҡабул ителә! Быны нисек аңларға һуң? Ә эштең айышы бик ябай һәм шуның менән дә ул төптән уйланып, йән әрнеүҙәре һәм һыҙланыуҙар һөҙөмтәһендә тыуҙырылғанға бер ҙә оҡшамай. Дөрөҫөрәге, был ике яҡтың балаларса ҡар бәреш уйынын хәтерләтә. Улай тиһәң дә, бәрешеү сәбәптәре һис тә уйын түгел, әлбиттә. Дәүләт Думаһы депутаттарының бындай аҙымы сәйәси даирәләрҙә Америка конгрессмендары тарафынан ҡабул ителгән "Магнитский исемлеге"нә яуап тип ҡабул ителде.

Рәсәй гражданины, Британия юридик компанияһы партнеры Сергей Магнитский сит ил инвестиция фонды етәксеһе, Рәсәйҙә эшләп байыған америка бизнесмены Уильям Браудерға һалым түләмәүҙә булышлыҡ итеүҙә ғәйепләнеп, ҡулға алына һәм төрмәлә үлә. Унан алда, Браудер мөнфәғәтен яҡлап тикшеренеүҙәр алып барған сағында фондтың Рәсәйҙәге компаниялары тарафынан түләнгән 5,4 млрд. һум аҡсаның ил ҡаҙнаһынан "юҡ булыуын" асыҡлай. Тап ошо фактты фашлауы Магнитскийҙың үлеменә сәбәпсе була ла инде, тип раҫлай был халыҡ-ара янъялды күҙәтеүселәр. Һөҙөмтәлә АҠШ-тың Европала хәүефһеҙлек һәм хеҙмәттәшлек буйынса комиссияһы тарафынан Магнитскийҙың һәләкәтенә һәм ошо нигеҙҙә ойошҡан енәйәтселеккә мөнәсәбәте булған 60 кеше - Рәсәй хәрби көстәр вәкилдәре, чиновниктар һәм судьялар әлеге юрист исемен алған махсус исемлеккә индерелә һәм уларға, кеше хоҡуҡтарын боҙоуҙа ғәйепләнеүселәр булараҡ, Америкаға килеү, бында балаларын уҡытыу, сит ил банкыларында иҫәп асыу кеүек санкциялар ҡаралаcағы билдәле була...

Америка граждандарына Рәсәй балаларын тәрбиәгә алыуҙы тыйыусы Рәсәй законы иһә АҠШ-та һәләк булған әлеге малай исеме менән "Дима Яковлев законы" тип йөрөтөлә. Рәсәй Дәүләт Думаһы был законды ҡабул итеп, дөрөҫ эшләнеме һуң, тигән һорау тыуа. Һәм, ғөмүмән, был аҙым Рәсәй йәмәғәтселегендә ҡыҙыу бәхәстәр килтереп тыуҙырҙы. Бер яҡтан, был турала бәхәстәргә урын да булыуы мөмкин түгел һымаҡ: бала аҙмыштарына, айырыуса уларҙың ғүмерҙәренә һәләкәт янағанда, уларҙы фәҡәт яҡлау, ҡанат аҫтына алыу кәрәк. Ләкин был мәсьәләгә икенсерәк ҡараштар ҙа бар. Мәҫәлән, билдәле тележурналист Владимир Познер былай ти: "Америкаға бына шулай яуап бирҙек. Һуң, ә бынан кемгә насар булды? Американдар хәҙер балаларҙы башҡа илдәрҙән, әйтәйек, Ҡытайҙан да барып аласаҡ. Әйткәндәй, улар унан хатта күберәк тә ала әле... Ә беҙҙең балалар менән ни булыр? Бөтә был йылдарҙа американдар Рәсәйҙән тиҫтәләрсә мең баланы тәрбиәгә алған. Эйе, бик үкенесле: шуларҙың 19-ының ғүмере өҙөлгән. Ә бит башҡалары бына тигән шарттарҙа йәшәй, улар араһында бит хатта сирлеләре, ғәриптәре лә бар..."

Хәҙер Америкала бына ошо законды ҡабул иткән Рәсәй депутаттарын да баяғы "Магнитский исемлеге"нә индереү буйынса ҡултамғалар йыйыу бара. "Кар өйөмө" ҙурайғандан-ҙурая түгелме? Беҙҙекеләр был петицияға ҡарата ниндәйерәк оборона тотор - әлегә билдәһеҙ. Ике ил араһына ҡуптан онотолған "һалҡын һуғыш" еле үтеп инмәксеме, юғиһә? Әйткәндәй, Яңы йыл байрамына тиклем үк Рәсәй Президенты В. Путин, Кеше хоҡуҡтары буйынса Президент Советының, Рәсәй Конституцияһына ҡаршы килә, тигән һығымтаһына ҡарамай, Америка граждандары өсөн Рәсәйҙәге етем балаларҙы аҫырауға алыуҙы тыйыусы әлеге Законға ҡул ҡуйҙы.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ҺҮҘ АРАҺЫНДА

## НИНДӘЙ БЫУЫН КИЛӘ?

**Бөгөн компьютер һәм интернет селтәре хаҡында белмәгән кеше юҡтыр, моғайын. 5-10 йыл элек кенә хыял етмәҫлек булып күренгән был әйберҙәр хәҙер тормошобоҙға ныҡлы үтеп инде. Ләкин һуңғы ваҡытта күп белгестәр тарафынан интернет селтәренең кеше психикаһына кире йоғонто яһауын йыш ишетергә була.**

Улар рәтендә билдәле инглиз уйлап табыусыһы Тревор Бейлис та бар. Ул кешелекте интернеттан килгән хәүеф хаҡында иҫкәртә. Бейлистың фекеренсә, бөгөнгө көндә кеше селтәрҙән алынған белемгә ныҡ ышана, ә был, үҙ сиратында, реаль тормошта бер нәмәгә эшкинмәгән һәм аҡылһыҙ "Googl быуыны" барлыҡҡа килтерергә мөмкин.

Автоном рәүештә тоҡаныусы радио (бындай радиолар электр уты киң таралмаған илдәрҙә ҙур популярлыҡ яулаған) уйлап табыусы белдереүенсә, буш ваҡытын компьютер алдында уҙғарыусы балалар яңы нәмәләр уйлап табыу һәм башҡа һәләттәрен юғалта, тип белдерә. Интернет үҫеп килеүсе быуындың аҡылына кире йоғонто яһай, тигән ышаныста ул. Әгәр ҙә хәлдәр үҙгәрмәһә, кешелек киләсәктә уйлап табыусыларһыҙ ҡаласаҡ, ә был, үҙ сиратында, прогрестың туҡтауына килтерәсәк, ти Тревор Бейлис. Шул уҡ ваҡытта уйлап табыусы, дөйөм алғанда, компьютер һәм Интернет селтәрен насарлыҡ күренеше, тип һанамай, ләкин балалар иғтибарын тик виртуаль донъяға ғына түгел, ә үҫтереүсе уйындарға һәм конструкторҙарға ла бүлергә тейеш, тигән ҡараштa. Үҙенең 5-6 йәшлек сағында уҡ төрлә әйберҙәр уйлап таба башлауын Бейлис нәҡ ошондай уйындарҙан һәм конструкторҙан "күрә".

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Мәскәүҙә РФ Дәүләт Советының Рәсәй Федерацияһы субъекттарының инвестициялар йәлеп итеү ҡеүәһен арттырыу һәм бизнесты үҫтереү өсөн уңайлы шарттар булдырыу мәсьәләләре тикшерелгән ултырышында ҡатнашты, сараны Рәсәй Президенты Владимир Путин алып барҙы. РФ Дәүләт Советы ултырышы йомғаҡтарына комментарий биреп, Рөстәм Хәмитов былай тине: "Инвестициялар йәлеп итеү эшмәкәрлеге беҙҙең өсөн өҫтөнлөклө булып тора. Был хаҡта Башҡортостан 2012 йылда алған инвестициялар күләме лә һөйләй - үҫеш 20 проценттан ашыу тәшкил итә. Стратегик инициативалар агентлығы стандарты менән билдәләнгән 15 пункт араһынан беҙҙә туғыҙы үтәлгән. Ҡалғандары өҫтөндә 2013 йылда эшләйәсәкбеҙ".

✓Өфөнөң Конгресс-холында Рәсәй Эске эштәр министрлығы эске ғәскәрҙәренең Волга буйы төбәк командованиеһының 29-сы "Булат" махсус тәғәйенләнештәге отрядына почетлы исем биреү тантанаһы үтте. Рәсәй Президенты Указы менән ҡаһарманлыҡ һәм ҡыйыулыҡ өсөн "Булат" отрядына генерал-майор Миңлеғәли Шайморатов исеме бирелде. Сара башланыр алдынан ҡатнашыусылар һәм саҡырылған ҡунаҡтар генерал-майор Шайморатов бюсына сәскәләр һалды һәм Енеү паркындағы Хәрби Дан музейында булды.

✓Башҡортостан Республикаһы Премьер-министры урынбаҫары Марат Мәһәҙиев Башҡортостан паралимпиясыларын һәм спорт өлкәһе хеҙмәткәрҙәрен Рәсәй һәм республика наградалары менән бүләкләү тантанаһы үткәрҙе. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Рәсәй йыйылма командаһы Лондонда дөйөм команда иҫәбендә икенсе урынға лайыҡ булды. Рәсәй спортсылары 102 наградa яуланы, Башҡортостан вәкилдәре 17 миҙалға эйә булды. Наградалар һаны буйынса Башҡортостан Рәсәй төбәктәре араһында беренсе урын алды. Рәсәй Спорт министрлығының Почет грамоталары менән уҡытыусылар, тренерҙар, уҡытыу-тәрбиә эше буйынса белгестәр, министрлыҡ һәм ведомство белгестәре лә билдәләнде. Паралимпия хәрәкәтен үҫтереүгә ҙур өлөш индергән өсөн Рәсәй Паралимпия комитетының Рәхмәт хаттарына М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты ректоры Раил Әсәҙуллин, Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Рәмил Дилмөхәмәтов лайыҡ булды.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# БУЛАСАҠҠА САРА ЮҠ...

**"Маңлайыңа яҙған хаҡ яҙмышты һыйпап ташлап булмай ҡул менән" тип әйтелә халыҡ йырында. Халҡыбыҙ йырҙарындағы был мотив, асылда, фажиғәле, әсе, әммә алда күреләсәк ҡотолғоһоҙ яҙмыш хаҡында. Ҡыҙыҡ килеп сыға: бәхетле, кинәнесле мәлдәр һәм тойғолар кисереүгә бәйле күреләсәк ваҡиғалар хаҡында ла шулай тип әйтергә буламы икән? Икенсе төрлө әйткәндә, яҙмыштың ҡатмарлыһы, әсеһе генә ҡотолғоһоҙмо? Шулай ҙа, ваҡытты ҡамтарып, тарихтарҙы киренән ҡайтарып, яҙмыштарҙы киренән ҡороп, сәғәтте кирегә бороп, ваҡиғаларҙы үҙгәрткән осраҡта ниндәй булыр ине икән хәҙерге көнөбөҙ? Үткән тарихҡа теләк-шарт һөйкәлеше аша бер ниндәй йөгөнтө яһап булмаһа ла, яҙыласаҡтарына мөмкиндер бит, тием. Әйтәйек, үткәнендән фәһем, һабаҡ, ғибрәт алып, шундай уҡ күрәсәктән ҡотолоу мөмкин бит. Улайһа, буласаҡҡа, күрәсәккә сара булып сыға түгелме? Шул хаҡта фекер йөрөтөп ҡарайыҡ.**



Иге-сиге күренмәгән сүллек буйлап тәлкән-тәлкән карауан барған, ти. Ундағы йөҙәрләгән дөйәләргә донъяның иң бай сауҙагәрҙәренең иң затлы әйберҙәре, алтын-көмөшө, нағышланған биҙәүестәре, кейем-һалымы һәм башҡа һатыу итеү әйбере артмаҡланған. Каруан һәр таң һайын ҡалҡҡан ҡояшҡа табан тарафҡа, оҙон көн һуҙымында дала үлсәме менән ҡарыштай ер үтеп, көндән-көн көнсығыштан ығышҡан, көн төнгә ялғанған, ҡояш офоҡҡа ауышҡан.

Иң алдағы дөйәне етәкләп, тамаҡ хаҡына каруан оҙатыусыһы булып ялланған фәҡир генә егет атлаған. Уның торор өйө лә, ғаиләһе лә, кейер йүнле кейеме лә булмаған, ғүмере каруан оҙатып, юлда үткән. Ә байҙар менән уларҙың хеҙмәтселәре иһә, дөйәләрҙең һыртына беркетелгән сатырҙар ышығында йөҡө һимертеп юл үткән. Шулай фәҡир генә булһа ла, егет далаһы, уның һәр бер ҡоҙоғон, туҡталҡа урыны-оазисын биш бармағындай яҡшы белеүе менән каруансы сауҙагәрҙәр араһында дан ҡаҙанған. Уға ышанғандар, иртәме-һуңмы, барыр ерҙәренә алып барып еткерерәнә тамсы ла шикләнмәгәндәр.

Бына турһыҡтағы һуңғы тамсы һыуҙар эселеп бөтөүгә каруанды әйҙәүсе егет сираттағы ҡоҙоҡ янына алдағы дөйәнең моронон төрттөргән. Кинәнеп-кинәнеп, һыуһындары ҡанғансы, ҡорһаҡтары тулып ауғансы, мулҡынып һыу эскән юлсылар. Инеш янында төн ҡунып, таңдан тамаҡланып, дөйәләрен тағы бер тапҡыр һуғарып, турһыҡтары тулғансы һыу алып, инде ҡуҙғалып киттек тигәндә генә уларҙы урындарында бер һуғышсан ҡәбилә яугирҙәре килеп баҫҡан. Уларҙан ҡото алынған сауҙагәрҙәр "Алыш бармы, атыш бармы?" тиеп әйтергә лә ҡурҡып, тегеләрҙән үҙҙәрен имен-аман ебәреүҙең хаҡын белешкән, азатлыҡҡа хаҡ бесә башлаған.

-Алтын-көмөшөгөҙ, барлыҡ тауарҙарығыҙ үҙегеҙгә ҡалһын. Беҙ, һеҙ уйлағанса, юлбаҫарҙар түгел. Һеҙгә шартыбыҙ шул: беҙгә бер кешегеҙҙе генә бирһәгеҙ, шул еткән. Хоҙайыбыҙ әҙәм балаһын ҡорбанға килтереүебеҙҙе һорай, - тигән ҡәбилә башлығы.

Сауҙагәрҙәр оло аптырашҡа ҡалып, бер-береһенә ҡарашып ҡатҡан, ҡорбанға бирер кеше таба алмайынса, оҙаҡ баш ватҡан. Кемеһелер шыбаға тотошоуҙы тәҡдим иткән дә, үҙенең өҫкә сығыуынан ҡурҡып, шундуҡ һүҙен кире алған. Шул саҡ сауҙагәрҙәр араһында абруйлы һаналған береһе:

-Буласаҡҡа сара юҡ. Күрер аҙабыбыҙ ошо булғандыр инде. Беҙҙең һәр ҡайһыбыҙҙың бер нисә ҡатыны, тағы ла әллә күпмешәр балаларыбыҙ бар. Уларҙың күҙ йәшен ҡойҙороп, етем итмәҫ өсөн, Алла хаҡына беҙ, бик ҡыйын булһа ла, анау каруаныбыҙға юл күрһәтеүсе егетте быларға бирергә тура килер. Уның илар ҡатыны ла, етем ҡалыр балаһы ла юҡ, - тигән.

Сауҙагәрҙең был тәҡдиме башҡаларҙың дөйөм хуплауы менән ҡаршы алынған. Ҡайһыһылыр уның аҡыллы кәңәшен ишеткәндән һуң күҙенә йәш алып:

-Эйе шул, ағай, һүҙенә ҡеүәт. Буласаҡҡа, ысынлап та, сара булмаған өсөн дә Аллаһы Тәғәлә беҙҙе был сәфәребеҙгә ошо егетте биреп сығарған бит инде. Бына беҙ сүллек буйлап ай самаһы килдек, егет беҙҙе үҙ юлыбыҙҙан бер иле лә яҙлыҡтырмай алып килде. Бына хәҙер инде беҙҙең алға һынауҙың иң ауыры килеп етте һәм Хаҡ Тәғәләнең ризалығы өсөн беҙ уға үҙенең бәндәһен кире ҡайтарырға бурыслы, - тип оло сауҙагәрҙең һүҙен йөпләп үк ҡуйған.

Шулай итеп, ҡәбилә яугирҙәре каруанды әйҙәүсе егеттең аяҡ-ҡулын сырмап алып ҡалған. Каруан иһә, сүллек буйлап мәнәр-мәнәр саҡрымдарға һуҙылған юлын артабан дауам иткән. Тағы ла офоҡҡа ҡояш ауышҡан, тағы ла көн төнгә ялғанған. Икенсе көнөнә үк каруансылар әйҙәүсе егеттең ни тиклем кәрәк булғанлығын аңлай башлаған. Ни өсөн тигәндә, туктап ял иткән урындарынан иртә таңдан ҡайһы тарафҡа китергә икәнлекте белмәй оҙаҡ ҡаңғырған улар. Бер-береһен еңешә алмай, һуғышыр сиккә еткән каруансылар. Улар юл башлаусы егеткә һалышып, хатта каруандың иртә таңдан ҡояш ҡалҡҡан тарафҡа ҡуҙғалырға тейешлегенә лә иғтибар итмәгән булған. Шуға күрә яңылыш йүнәлеш икенсе көндә үк алынған һәм бишенсе көн тигәндә каруан ҙур бер әйләнеш яһап, икенсе таңда ҡуҙғалған урынға тағы килеп сыҡҡан. Ошо мәлдә инде уларҙың эсер һыуҙары ла бөткән. Каруансылар баштарын ташҡа һуғырҙай булған да бит, ҡом араһында һыу ғына түгел, ташы ла табылмаған. Хәҙер инде сауҙагәрҙәр аҡтыҡ хәлдәрен йыйып, каруанды әйҙәүсе егетте ҡорбан итергә ҡалдырып киткән ҡоҙоҡто нисек булһа ла табыу маҡсаты менән кире тарафҡа ҡуҙғалған. Әммә күңелдәренә инеп ултырған ҡурҡыу тойғоһо уларҙы тағы ла аҙашыу түңәрәгенә индерен, сарсауҙан талсыҡҡан дөйәләр һәм уларҙың хужалары берәмләп-берәмләп каруандан айырылып ҡала барып, тағы ла өс көн үтеүгә каруан тотошлай таралып юҡҡа сыҡҡан. Уның ҡарауы, дөйәләрҙе һәм каруансыларҙы сүл бүреләре, ҡарһаҡтар ашап кинәнгән...

Әбит, дөрөҫөн әйткәндә, буласаҡҡа сара юҡ, тип әйтеүсе сауҙагәр һис тә яңылышмаған. Ул үҙҙәренә ситтәрҙең һөжүм итерен дә, каруанды әйҙәүсе егетте ҡорбанға тип бирерҙәрен дә, аҙаҡ ошо сәбәпле каруандың һәләкәткә осрарын да иҫтә тотоп, ошо һүҙҙәрҙе әйткән булып сыға. "Әгәр ҙә атайымдың үлерен кисә белгән булһам, бер телем икмәккә алмаштырған булыр инем", тип аслыҡтан илаған малай хәленә ҡалған сауҙагәрҙәр. Улар, бәлки, ҡатындарын тол, балаларын етем ҡалдырмайбыҙ, тип ошо юлды һайлап дөрөҫ тә эшләгәндер. Әммә улар барыбер ҙә намыҫ принцибына ҡаршы барыуы һәҙөмтәһендә һәләкәткә тарыған.

...Халҡыбыҙҙың шанлы ла, ҡанлы ла үткәне хаҡында уйланып ултырам да, һәр заманда табылған тәфтиләүҙәр тарафынан хакимдар алдында "Был милләт ер йөҙөнән юҡ ителде" тигән рапорттар бирелһә лә, яңы мең йыллыҡҡа, яңы быуатҡа тиклем йәшәйбеҙ икән, бында мин атай-олатайҙарыбыҙҙың намыҫ принцибына тоғролоғона бәйле сәбәпте күрәм. Аллаһы Тәғәлә беҙҙе тап шуның өсөн дә йәшәтәләр, тим. Буласаҡҡа сара булмаһа ла, намыҫҡа, иманға, әхлаҡҡа тоғролоҡ һаҡлағанда киләсәкте күреребеҙгә сара бар, тимәк.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡорт дәүләт медицина университеты федераль бюджеттан түбән һәм экстремаль түбән тән ауырлығы менән тыуған балаларҙы ҡарап үҫтереү өсөн медицина ҡорамалдары һатып алыуға 20 миллион һум күләмендә субсидия алаҫаҡ. Рәсәй Хөкүмәтенең ҡарарына ярашлы, 2013 йылда был маҡсаттарға субсидиялар 40 миллион һум тәшкил итәсәк. Улар Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығының ике юғары һөнәри белем биреү федераль дәүләт бюджет учреждениеһына бирелә. Улар - Сеченов исемендәге Беренсе Мәскәү дәүләт медицина университеты һәм Башҡорт дәүләт медицина университеты.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Указдары менән бер нисә мәҙәниәт хеҙмәткәренә республиканың почетлы исемдәре бирелде. Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы исеменә Күгәрсен районы Тәүәкән ауыл мәҙәниәт йорто хеҙмәткәре Ғәзим Ильясов һәм композитор, профессор, З.Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһының композиция кафедраһы мөдире Ләйлә Исмәғилева, "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре" исеменә М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының баш режиссеры Айрат Абушахманов лайыҡ булды.

✓Силәбе өлкәһенең Ш.Бабич исемендәге башҡорт һәм татар әҙәбиәте китапханаһында Яңы йылды ҡаршылауға арналған кисә үтте. Китапханала ойошторолған башҡорт телен өйрәнеү буйынса курстарға йөрөгән һәр кеше туған телендә Яңы йылды ҡайҙа һәм нисек ҡаршылаясағы хаҡында һөйләне. Ҡатнашыусылар араһында башҡорт телендә иң яҡшы ҡотлауға үҙенсәлекле ярыш ойошторолдо. Кисәгә килгән Ҡыш Бабай уларҙы иғтибар менән тыңлап, һәр береһенә бүләк тапшырҙы.

✓Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова Мәскәүҙә Рәсәй Федерацияһының ЮНЕСКО эштәре буйынса комиссияһының "Башҡортостан Республикаһының ЮНЕСКО менән хеҙмәттәшлеге тураһында" дөйөм йыйылышында сығыш яһаны. Комиссия ултырышы Рәсәйҙең сит ил эштәре министры Сергей Лавров рәйеслегендә үтте. Был сәйәси сарала БР Хөкүмәте вице-премьеры Башҡортостандың халыҡ-ара гуманитар проекттарын тәҡдим итте. Атап әйткәндә, ул 2013 йылда Башҡортостандың ЮНЕСКО ҡарамағындағы "Донъя халыҡтары мәҙәниәттәре диалогы" акцияһында ҡатнашыуын дауам итәсәге хаҡында әйтте.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# МӨМКИНЛЕКТӘР...

## теләктәрҙе аптыратһын!

**Бәлки, бер аҙ сәйерерәк тә яңғырар, әммә беҙ, Өфө ҡала округы Советы депутаттарының сираттағы ултырышында ҡатнашып ҡайтҡандан һуң, баш ҡалабыҙға шундай теләк теләргә булдыҡ: мөмкинлектәр теләктәрҙе аптыратһын! Был юҡтан ғына тыуған теләк түгел, сөнки һүҙ аҡса, йәғни Өфөнөң 2013-2015 йылғы бюджеты тураһында бара. Ә уға тиклем баш ҡаланың 2013 - 2015 йылдарға үҫешенең төп социаль-иҡтисади фаразына күҙ һалайыҡ. Сөнки бюджет тап ошо күрһәткестәргә нигеҙләнеп эшләнә бит.**

Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Альбина Йосопова бедереүенсә, 2012 йылда ҡала иҡтисады ыңғай үҫешкән. Йыл һуңына тиклем тауар әйләнешенең үҫеше - 104, йәмәғәт туҡланыуы - 106, халыҡҡа күрһәтелгән түләүле хеҙмәттәр 100,5 процент тәшкил иткән. Инвестициялар күләме 88 миллиард һумға еткән. 2013 һәм унан һуңғы йылдарҙа инвестициялар күләменең йылына 6 миллиард һумға үҫеше күҙаллана. Инвестицияларҙың өстән бер өлөшөн (27,6 процент) торлаҡ һәм социаль-мәҙәни объекттар төҙөүгә йүнәлтеү планлаштырыла. Мәҫәлән, республика ярҙамы менән 1270 урынлыҡ 8 балалар баҡсаһы төҙөү күҙаллана. 7 урында мәктәптәр төҙөү өсөн дә республика тарафынан ярҙам кәрәк. Һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә лә төрлө төҙөлөш эштәре фаразланған. 2013 йылда "Инорс-4б" биҫтәһендә поликлиника төҙөү буйынса проект-тикшеренеү эштәре үткәреү планлаштырылған; 2014 - 2015 йылдарҙа Киров, Октябрь, Ленин, Дим райондарында төрлө медицина объекттары ҡалҡып сығасаҡ. 2013 йылда спорт объекттарын төҙөүгә, коммуналь төҙөлөшкә, башҡа ҙур объекттар төҙөлөшөнә лә етди иғтибар биреләсәк.

Артабан ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Илгиз Насыртдинов бюджет проекты менән таныштырҙы. Был мөһим документтың үҙенсәлеге шунда, ул өс йылды - 2013 -2015 йылдарҙы - күҙ уңында тотоп әҙерләнгән. 2013 йылда бюджеттың һалым һәм һалым булмаған сығанаҡтарҙан килгән килеме 10 млрд һум буласаҡ (2012 йылға раҫланған бюджеттан 23 процентҡа күберәк). 2013 - 2015 йылдарға үҙкилем 10 һәм 11 млрд һум тәшкил итәсәк. 2013 йылда һалым килеме өлөшөнә 65 процент тура киләсәк. Планда ҡаралған осорҙа (2014-2015 йылдар) һалым килемен 69-70 процентҡаса күтәреү күҙаллана. Уҙған йылдарҙағы кеүек төп сығанаҡ булып физик шәхестәрҙең килеме (47 проценттан 54 процентҡаса) тора. 2013- 2014 йылдарҙа ул 5-әр млрд һум тәшкил итһә, 2015 йылда 6 млрд һум буласаҡ. Дөйөм килемгә һалым күләме бюджетта йыл һайын 1 млрд һум күләмендә фаразлана.

Әйткәндәй, бюджет проекты халыҡ иғтибарына сығарылып, уның сығым өлөшө буйынса төрлө тәҡдимдәр ҡабул ителә. Былтыр халыҡ тыңлауҙарында 600 кеше ҡатнашҡан. Граждандарҙан яҙма рәүештә 15, шулай уҡ сығыш яһарға яҙылып та ваҡыт етмәгән граждандарҙың тәҡдимдәре ҡабул ителгән һәм улар бюджетты әҙерләгәндә иҫәпкә алынған.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Халыҡ мәҡәле, юрғаныңа ҡарап аяғыңды һуҙ, тигәндә нимәне күҙ уңында тотҡаны билдәле - булғанына шөкөр ит, артыҡҡа ымһынма. Ләкин беҙ мөғжизәләр заманында йәшәйбеҙ һәм Яңы йыл - ысынлап та, мөғжизәләр ваҡыты ул. Шуға күрә, хыялдарҙы ҡала округы Советы депутаттары бер тауыштан ҡабул иткән бюджет сиктәренән киңәйтеберәк, ҡала хакимиәтенә лә, һәр ҡайһыбыҙға ла: мөмкинлектәребеҙгә теләктәребеҙ аптыраһын, тип теләйек.**

**Земфира ХӘБИРОВА.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ӨФӨБӨҘ...

## етемдәрһеҙ ҡала булһын!

**Ололар һөйләүенә иғтибар итһәк, улар Бөйөк Ватан һуғышына тиклем Рәсәйҙә балалар йорттары, етемдәр бөтөнләй булмауы тураһында йыш иҫкә ала. Бындай учреждениелар һуғыш йылдарында һәм унан һуң күпләп асыла башлай, сөнки илдә етемдәр, ата-әсәһе вафат булып, ҡараусыһыҙ ҡалған балалар һаны арта. Ул йылдарҙа, ысынлап та, балалар йорттарының асылыуына һуғыш ғәйепле һәм төп сәбәпсе була. Ошо күҙлектән сығып ҡараһаҡ, бөгөн Рәсәйҙә асыҡтан-асыҡ түгел, ә эскелек, наркоманлыҡ, тәмәке тартыу артына йәшерелгән аҫтыртын һуғыш алып барыла, белгестәр уны геноцид тип атай. Айырма бары шунда ғына: беҙ тарих тип белгән һуғышта атай-олатайҙарыбыҙ тыуған иле өсөн ғүмерен ҡорбан итһә, хәҙерге геноцид ҡоралы ғүмерҙәрҙең баһаһын бик түбән баһалай - ер ҡуйынына үҙ теләге менән инеп ятыусыларҙың, балаларын ата-әсәй тәрбиәһенән мәхрүм итеүселәрҙең күңелендә ил, ер тигән изге төшөнсә бөтөнләй юҡтыр, күрәһең. Ә илебеҙ, уны ни тип кенә яманлаһаҡ та, барыбер ҙә мәрхәмәтле - сабыйҙарҙы ситкә типмәй, үҙ ҡанаты аҫтына ала, уларҙы кеше итергә тырыша.**



Һүҙҙе ошо бигүк матур булмаған теманан башлауға матур ваҡиға сәбәп булды. Быйыл Өфө Ауыр тормош хәл-торош алдында ҡалған балаларға ярҙам итеү фонды менән Рәсәйҙең бәләкәй һәм урта ҡалалары ассоциацияһы тарафынан ойошторолған "Етемдәрһеҙ ҡала" конкурсында ҡатнашып һәм он-лайн тауыш биреүҙә 30 меңдән ашыу тауыш йыйып, Рәсәй ҡалалары араһында абсолют еңеү яуланы. Шулай уҡ ул социаль етемлекте иҫкәртеүгә йүнәлтелгән сараларҙы уңышлы тормошҡа ашырыусы ҡалалар рейтингында лидерҙар исемлегенә инде. Бүләкләү тантанаһы Мәскәүҙә, Федерация Советында үткән. Ошо ваҡиға айҡанлы, сарала ҡатнашыусылар - ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов менән Опека һәм попечителлек идаралығы начальнигы Руслан Хәбибов журналистар өсөн матбуғат конференцияһы уҙғарҙы.

Сынтимер Биктимер улы белдереүенсә, бөгөн һүҙ алып барылған категорияға ҡараусыларҙы яҡлау буйынса ҡануниәт булдырылһа ла, Өфө ҡала округы хакимиәте уҙған быуаттың 90-сы йылдарында уҡ, закон-маҙар көтөп тормай, тота ла патронат тәрбиә буйынса Үҙәк асып ебәрә. Һуңынан ғына шундай закон ҡабул ителә. Шуға ла был ҡанунды ҡала округы хакимиәте инициативаһы менән эшләнгән тип әйтергә тулы хоҡуҡ бар. Бынан тыш, һуңғы йылдарҙа ошо йүнәлештә яңынан-яңы программалар (баланы үҙ ғаиләһен алмаштырыусы ғаиләләргә биреү, опекаға алыу, үҙ ғаиләләренә кире ҡайтарыу, уллыҡҡа, ҡыҙ итеп алыу) буйынса эш алып барыла. Был эшмәкәрлек ниндәй генә төрҙә булыуына ҡарамаҫтан, уның маҡсаты бер - ҡалала балалар йорттарын бөтөнләй ябыу. Сөнки баланың үҫешенә, шәхес булараҡ формалашыуына, был тормошта үҙ урынын табыуына ғаиләнән дә яҡшы тәрбиә биргән башҡа урын юҡ. Һандарға мөрәжәғәт иткәндә инде, йыл һайын 500 бала үҙ ғаиләһен алыштырыусы ғаиләләргә урынлаштырылһа, 50 бала үҙенең тыуған ғаиләһенә (ата-әсәһе үҙ балаһын тәрбиәләү хоҡуғынан мәхрүм ителгәндән һуң улар үҙҙәрен аҡлаған осраҡта) ҡайтарыла. Ләкин балаларҙың артабанғы яҙмышы ғаиләгә генә йөкмәтелеп ҡуйылмай, Үҙәк белгестәре бер нисә йыл дауамында был ғаиләләр менән эшләй, уларҙы даими контролдә тота. Тап ошо сәбәптән дә балалар сит ил граждандарына уллыҡҡа йәки ҡыҙ итеп бирелмәй. Уларҙы бары тик Башҡортостан йәки Рәсәй ғаиләләре генә ала. Бында тағы ла шуны билдәләп китеү зарур: ҡала хакимиәте вәкилдәренең дә бер нисәһе балалар йорттарынан тәрбиәгә бала алған.

Социаль етемлекте иҫкәртеү буйынса үткәрелгән сараларҙан иң мөһимдәре һәм масштаблыларынан Балаларҙы яҡлау көнөндә 300 бала өсөн ойошторолған байрамды, Аҫырауға бала алған ғаиләләрҙең ҡала форумын, "Беренсе тапҡыр беренсе синыфҡа" мәрхәмәтлек акцияһын, Өфө ҡалаһының интернат учреждениеларының һәм ғаиләне алыштырыусы ғаиләләрҙән булған балаларҙың сығарылыш кисәһен, "Хәстәрле йөрәк" мәрхәмәтлек акцияһын билдәләп китергә мөмкин. Шуға күрә лә Мәскәүҙә үткән бүләкләү тантанаһынан һуң Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән ҡайһы берәүҙәрҙең Өфөгә килергә ҙур теләк белдереүе юҡҡа түгел. Бында бүлешәһе тәжрибә лә, күрһәтәһе эштәр ҙә етерлек. Бөгөн баш ҡалала дүрт кенә балалар йорто (береһе - коррекцион балалар баҡсаһы) бар. Уларҙа балалар һаны йылдан-йыл кәмей һәм киләсәктә ни бары бер генә йорт ҡалыуы ихтимал. Был бер йортто иһә бер нисек тә ябыу мөмкин түгел - унда көн һайын медицина хеҙмәтенә мохтаж, ауыр хәлле балалар йәшәй.

Әйткәндәй, Рәсәй субъекттары араһында бары тик Кавказ республикаларында уҙған быуаттың 90-сы йылдары урталарына тиклем балалар йорттары бөтөнләй булманы. Сөнки ғаилә ниндәй генә фажиғәгә тарымаһын, балаларҙы туғандары сит ҡулдар тәрбиәһенә түгел, ә үҙҙәренә алып ҡарай ине. Ләкин һуңғы ике тиҫтә самаһы йылда унда ла балалар йорттары күренә башланы. Сәбәбен аңлатып тороу кәрәкмәйҙер...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөнөң Сипайлово биҫтәһендә 220 урынға иҫәпләнгән балалар баҡсаһы асылды. 69-сы балалар баҡсаһы 2012 йылда баш ҡалала төҙөлгән алтынсы мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы. Спорт һәм музыка залдарынан тыш, яңы бинала бассейн, медицина һәм процедуралар бүлмәләре бар. Бында шулай уҡ уҡытыусы-логопед, педагог-психолог бүлмәләре, һынлы сәнғәт студияһы, методика кабинеты, өҫтәмә белем биреү бүлмәһе йыһазландырылған. Балалар баҡсаһында 12 төркөм эшләйәсәк. Бында 12 уйын майҙансығы, ике спорт майҙансығы урынлашҡан.

✓Өфөнөң Дим районында Ухтомский, Дағстан һәм Магистраль урамдары менән сикләнгән территорияла заманса микрорайон төҙөлә башлаясаҡ. Был территорияны планлаштырыу һәм межалау проекты буйынса йәмәғәт тыңлауҙарын Өфө ҡала Советы депутаттары үткәрҙе. Тыңлауҙарҙа микрорайонда йәшәгән 80-дән ашыу кеше ҡатнашты. Сығыш яһаусылар проектҡа ыңғай баһа бирҙе. Проекттың баш архитекторы Ирина Свитская һүҙҙәренсә, бараҡтар, ике ҡатлы йорттар һәм иҫке гараждар һүтеләсәк, уларҙың урынында 9-16 ҡатлы йорттар, 140 һәм 180 урынлыҡ ике бала баҡсаһы, 1200 кешегә иҫәпләнгән мәктәп һәм спорт үҙәге ҡалҡып сығасаҡ. Микрорайонда яңы балалар майҙансыҡтары, банк, почта бүлексәһе, магазиндар, 350 машинаға иҫәпләнгән күп ҡатлы машиналар ҡуйыу урыны төҙөләсәк.

✓Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылының эмблемаһы раҫланды - ул аҡ бөркөт һүрәте. Авторы - "Башҡортостан" гәзитенең рәссамы Нәсих Хәлисов. Бөркөт һүрәте юҡҡа ғына йыл символы итеп һайланмағандыр, сөнки был ҡош үҙе үк экологик таҙа булған урындарҙы һайлап ҡына йәшәй.

✓Яҙыусы Сафуан Әлибаев Башҡортостан Республикаһының Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге дәүләт премияһына тәҡдим ителде. Республиканың Яҙыусылар союзы ултырышында түбәндәге өс кандидатура ҡаралды: Сафуан Әлибаев, Әсхәл Әхмәт-Хужа һәм Рәмзәнә Әбүталипова. Яҙыусы һәм шағир, халыҡ-ара Андерсен исемендәге премия дипломанты Сафуан Әлибаев кандидатураһы бер тауыштан үтте.

## ҮҘ ӨЙӨМДӘ - ҮҘ КӨЙӨМ

**Ауылда йәшәп тә мал тотмай, ҡош-ҡорт үрсетмәй йә иһә баҡса үҫтермәй йәшәгән ғаиләләргә ҡарата элек-электән ҡырын ҡараш һаҡлана. Рәхәтләнеп үҙ итеңде, май-ҡаймағыңды, йәшелсәңде ашап ғүмер итмәгәс, ауылда тороуҙың бер ҡыҙығы ла, файҙаһы ла юҡ, тип һанай ундайҙар. Шуға күрә лә, совет заманының һәр ғаиләгә бер баштан да артыҡ һыйыр тотоуҙы тыйған законы үҙ көсөн юғалтҡас та, йүнселдәр, етеш йәшәргә тырышҡандар күпләп мал үрсетеп, тормошон яйға һалырға тырышты. Кәртәһендә бер түгел, буралай ике һыйыры, тиҫтәләгән ҡош-ҡорто булғанда, кешенең иртәнге көнгә ышанысы ла, өмөтө лә ҙурая төштө.**

# ҠАҘАНЫҢА НИ ҺАЛҺАҢ...

## ҡалағында шул булыр



Һәр хәлдә, был бөгөнгә тиклем шулай булды. Әммә ләкин бөгөн ауылда йәшәүселәрҙең дә мал аҫырауға ҡарашы үҙгәрә төшкән. Үҙ техникаң юҡ икән, мал, ҡош-ҡорт үрсетеүҙең дә әллә ни файҙаһы юҡ, килгән килем сығымдарҙы ҡапламай, шуға әҙерҙе һатып алыу - иң анһаты, тигән ҡараш нығына бара. Төптәнерәк уйлап ҡараһаң, был һүҙҙәрҙә лә хаҡлыҡ бар кеүек. Хәләл тиреңде түгеп үҫтергәнеңде арзан ғына хаҡҡа һатып ебәреү ҙә еңел түгел шул. Элегерәк, кемдәр мал тота, шуларға ғына баҙарҙа һатыуға рөхсәт бирелһә, хәҙер күбеһенсә унда ла еңел аҡса эшләргә теләүселәр рәхәтләнә. Транспорты булмағандар машина яллап, урын һәм башҡа ваҡ-төйәк мәшәҡәттәр өсөн әллә күпме аҡса түләп, иртә таңдан баҙарға сығып баҫыуға ҡарағанда, үҙ тауарын ауыл буйлап, осһоҙға ғына майлы киҫәк эҙләүселәргә биреп ебәреүҙе хуп күрә башланы. Бына шундай йылғырҙарҙың хәләл көс менән тапҡан өлөшөңә инеүе күптәрҙең күңелен ҡыра, дәртен һүрелдерә лә инде. Үкенескә күрә, быҙауҙы - тана, себеште ҡаҙ итеү өсөн дә ҙур көс түгелеүен барыһы ла аңлап етмәй шул. Ошо юлдарҙы яҙғанда, баҙарҙа эремсек алып торған ҡала ҡатынының "Башта ҡаймағын айыртып алалар, аҙағынан шул айыртылған һөттөң эремсеген ат хаҡына һаталар" тип ризаһыҙ һөйләнгәне иҫкә төшә. Ҡаймаҡ, эремсек ашау өсөн дә малды ҡыш сығарырға, астан үлтермәҫ өсөн йәй буйына бесән эшләргә, һыйырын ваҡытында һауып, ағын эшкәртә белергә кәрәк шул. Бер кемдең дә һыйыры әҙер май-ҡаймаҡ сығарып тоттормай, ип-яйың булғанда ғына ит-майың да була.

Нимә генә тимәйек, Яңы йыл байрамы алдынан да, бөгөн дә ауылдарҙа гөрләп һуғым, ҡаҙ өмәләре бара. Кемдер үҫтергәнен һатып, әҙерәк аҡса эшләргә тырыша, икенсе береһе ҡышҡылыҡҡа келәтен тултыра, туған-тыумасаһына күстәнәс әҙерләй. Үҙеңдеке бәрәкәтле лә, файҙалы ла була, тип һанағандар ҡышты барыбер ҙә һуғымһыҙ ҡаршыламай. Тик шуныһы тынғылыҡ бирмәй: ысынлап та, мал тотоуҙың файҙаһы, килеме бармы һуң бөгөн? Ошо хаҡта ҡыҙыҡһыныуыбыҙҙы ҡандырыу өсөн Учалы районының Ҡобағош ауылында күп мал аҫрап йәшәүсе хужабикәләр - Әлфирә Фазлетдинова һәм Гөлсөм Лоҡманова менән әңгәмәләштек.

- Ауылда малһыҙ йәшәп булмай, - тип һөйләп китте Гөлсөм Лоҡманова.- Күҙ менән ҡаш араһында үҙгәреп торған ышанысһыҙ заманда эше лә - бөгөн бар, иртәгә юҡ. Ялҡауың килмәйенсә, мал, ҡош-ҡорт көтһәң, өмөт бағлап торған ышанысың була. Йыл һайын өс һыйыр тотабыҙ, йәйен-ҡышын баҙарға йөрөп, ағын һатам. Быйыл трактор алырға булғас, бер һыйырҙы тотондоҡ, уның урынына танабыҙ үҫеп килә. Алла бирһә, икенсе йыл тағы өсәү итербеҙ. Һатып алыуға ҡарағанда, ябай өй ҡаҙҙарын тотоуҙы хуп күрәм. Сығымы ла, мәшәҡәте лә әҙ була. Ике оя инә ҡаҙым, яҡшылап тәрбиәләп торһаң, йыл һайын 20-25 бәпкә сығара. Башта уларға ҡыш буйы йыйған икмәк катыһын ашатабыҙ, аҙағыраҡ үләнгә ҡушабыҙ, һыуҙан өҙмәйбеҙ. Һуйырға бер-ике ай ҡалғас ҡына һимертеү өсөн ныҡлап ашата башлайбыҙ. Ғөмүмән, ауыл ҡаҙҙарынан да уңайлыһы юҡ. Бәпкәләрен үҙҙәре ҡарай, сир-фәләнгә, һыуыҡҡа ла бирешеп бармай. Һуйылған ҡаҙҙар үҙебеҙҙән үтмәй, балалар уҡыуға киткәндә алып китә, туған-тыумасаға күстәнәскә таратабыҙ...

Әлфирә Фазлетдинованың фекере иһә саҡ ҡына икенсерәк. Ул өй ҡаҙҙары тотоуға ҡарағанда инкубатор себештәрен һатып алыуҙы уңайлыраҡ һанай:

- Өй ҡаҙы тотоу күпкә осһоҙораҡ булһа ла, уның үҙ нескәлектәре бар. Яҡшы үрсем алыу өсөн ҡаҙҙы бала кеүек тәрбиәләргә тура килә. Бигерәк тә йомортҡа һалыу, баҫыу ваҡыты еткәс, уңайлы шарттар булдырыу мөһим. Ҡаҙ ултырған ер мотлаҡ таҙа, йылы булырға, үтәнән-үтә ел иҫеп тормаҫҡа тейеш. Һалынған йомортҡаны ла өшөтмәй генә ваҡытында алып, тыныс, насар еҫ булмаған урында йыйып барырға кәрәк. Ошо ҡағиҙәләрҙе теүәл үтәгәндә генә күпләп себеш сығартырға өмөт бар. Шуға күрә лә, артыҡ мәшәҡәтләнмәҫ өсөн, яҙғыһын бәпкәләрҙе һатып алыуҙы хуп күрәбеҙ. Быйыл ике мең һумлыҡ емде һатып, ҡалғанын утынға алыштырып алдыҡ. Унан тыш, бәпкәләр тиҙерәк нығынып китһен өсөн төрлө витаминдар ҙа алырға тура килде. Күберәк булһа ла, сығымдар яйлап сыҡҡас, артыҡ һиҙелмәй. Үҫтергән бәпкәләребеҙ иш янына ҡуш була. Ҡош-ҡорттан тыш, һыйыр, ваҡ мал да тотабыҙ. Быҙауҙарҙың береһен һатыуға, икенсеһен һуғымға тип алдан уҡ инселәп ҡуябыҙ. Мал тотоноп, трактор ҙа алып ебәрҙек. Хәҙер бесән эшләүе лә элекке кеүек түгел, күпкә еңелләште. Малды тота белһәң, файҙаһы күп. Үҙеңдекенә бер нәмә лә етмәй, сөнки һатып алғандың бәрәкәте лә булмай. Тәрбиәләп үҫтергәнебеҙ үҙебеҙгә лә, һатыуға ла етә.

**Шулай итеп, һәр кем үҙе ғәҙәтләнгәнсә донъя көтә ауылда. Берәүҙәр, файҙаһы юҡ, мәшәҡәте күп, тип, һатып алыуҙы уңайлы һанаһа, икенсе береһе ауырлығына ҡарамай, мотлаҡ үҙе үҫтереп, мәнфәғәтен күрергә тырыша.**

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**

## ЙЫЛАН ЙЫЛЫНДА...

# ЙӘШТӘР - ЙӘШТӘРСӘ



**Йылан йылында тыуыусы йәштәрҙән алдағы йылдан нимә өмөт итеүҙәрен, уй-хыялдары менән уртаҡлашыуын һораныҡ.**

**Артур Усманов, Өфө дәүләт авиация техник университеты аспиранты:** 2013 йылға иң ҙур хыялым - диссертациямды уңышлы ғына яҙып бөтөрөү, яҡшы эш табыу. Ғөмүмән, минең уйлауымса, Йылан йылында тыуғандар һалҡын ҡанлы, уйлап эш итеүсәндәр. Киләһе йыл тап ошо сифаттарға таянып йәшәгән кешеләр өсөн уңышлы буласаҡ. Милләт мәнфәғәттәрен хәстәрләгәндә лә айыҡ фекер йөрөтөп, төптән уйлап эш иткәндә, Йылан йылы барыбыҙ өсөн дә уңышлы килер. Халҡымдың, телемдең яҙмышына килгәндә инде, үҙәкләштереү сәйәсәте артабан да алып барыласаҡ. Әммә һәр башҡорт үҙ балаһында милли рух тәрбиәләп үҫтерһә, иң тәүҙә өйөндә башҡорт йолаларын тотоуҙы талап иткән саҡта, ниндәй генә сәйәсәт алып барылмаһын, асылыбыҙ һаҡланып ҡаласаҡ, тип иҫәпләйем. Йылан йылында милләттәштәрем уйланһын, аҡылына, асылына ҡайтһын, тигән теләктәмен.

**Фидәлиә Баймөхәмәтова, Башҡортостан юлдаш телевидениеһы хәбәрсеһе:** Кеше өсөн икенсе берәүҙең ныҡлы ҡулын тойоуҙан да мөһим тойғо юҡтыр. Шуға күрә, ата-әсәйем, туғандарым, яҡын дуҫтарым йыл буйына эргәмдә булыр, тип өмөт итәм. Яңы йылдың нисек килере һәр кемдең үҙенән тора. Тырыш, ныҡышмал, маҡсатлы, эшсән кешеләр һәр ваҡыт теләгәненә өлгәшәсәк. Шуға ла йыл буйына мөсәлдәге ниндәй генә хайуан хакимлыҡ итмәһен, уңыш тырыштарға ғына йылмаясаҡ. Йылан йылында донъяға килгән кеше булараҡ, мин дә бер эләктергәнемде ысҡындырмам, үҙемә кәрәкте алырмын, тип ышанам.

**Илдус Хөснөтдинов, БДУ аспиранты:** Мин был мөсәлдәрҙең кешенең холоҡфиғеленә, тормошона ниндәйҙер кимәлдә йоғонто яһауына ышанам. Шуға ла ниндәйҙер кимәлдә мин ошо йән эйәһенең сифаттары 2013 йылдың нисек килеренә йоғонто яһар, тип уйлайым. Был йыл уйлап, аҡыл менән эш итеүселәргә яҡшы буласаҡ. Мин үҙем өсөн яңы йылдан тик ыңғай ваҡиғалар ғына көтәм. Моғайын, күптән ниәт итеп йөрөгән уйым - йорт һалып, ғаилә ҡороу теләгем тормошҡа ашыр.

**Сәүиә ЗАРИПОВА яҙып алды.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Һөт - дауалаусы



❖ Һөт эсемлек кенә түгел, дауалаусы ла. Һыйыр һөтө тиҙ эшкәртелә, ашҡаҙанды ла таҙарта.

❖ Яңы һауылған һөт мейене нығыта, хәтерҙе, йөрәк эшмәкәрлеген яҡшырта, үпкә сиренән дә дауалай.

❖ Ике өлөш һыу ҡушылған (2:1) һөт һейҙек ҡыуыусы булып тора.

❖ Ағыуланғанда бер нисә тапҡыр һөт эсеп, яһалма ҡоҫорға.

❖ Һөттә бешкән дөгөнө ашау ғүмерҙе оҙайта, бит, тән тиреһен йәшәртә. Әстерхан сәтләүеген (грек сәтләүеге), хөрмәне һөткә ҡушып ашау ҙа ошо һөҙөмтәне бирә.

❖ Күҙгә яңы һауған һөт тамыҙһаң, йәки күҙҙе уның менән ышҡыһаң, ауыр төҙәлә торған күҙ сирҙәре лә дауалана. Тик был дауаны оҙайлы ваҡыт эшләргә кәрәк.

❖ Элек әсәнең күкрәк һөтөн, бүләктәр биреп, күҙгә һиптерткәндәре лә билдәле.

### Авитаминоз булһа...

1 ҡалаҡ миләш, 1 ҡалаҡ иҙелгән гөлйемеште ҡушырға ла, 2 стакан ҡайнаған һыу ҡойорға, 10 минут ҡайнатырға, төнгә ултыртып ҡалдырырға. Көнөнә яртышар стаканлап 2 мәртәбә эсергә.

### Көндәр үҙгәргәнгә йөрәк ауыртһа...

❖ Йөрәк ауыртып, тын ҡыҫылғанда 5 баш иҙелгән һарымһаҡты, ҡабығы менән үткәрелгән 5 лимонды (эсенән орлоғон алып), 500 грамм балды бергә ҡушырға ла, бер аҙна төнәтергә, гел болғатып торорға. Көнөнә 3 мәртәбә ас ҡарынға 1-әр балғалаҡ эсергә. Дауаны 2 ай эшләргә.

❖ Бесәй үләне (валериана) һәм энәҙе (боярышник) емешен бергә ҡушып, аҙ ғына һыу менән шуны 25-30 тамсы эсергә, ауыҙҙа бер аҙ тоторға.

### Ҡул-аяҡтар ныҡ өшөгәндә

1 шешә араҡыны, 2 ҙур ҡуҙаҡ әсе боросто, 1 ҡалаҡ тоҙҙо, 1 ҡалаҡ гәрсисте (горчица) бергә ҡушып болғатырға һәм шыйыҡлыҡ ҡыҙыл төҫкә ингәнсе төнәтергә. Әҙер булғас, төнгөлөккә ошо шыйыҡсаны ҡул-аяҡтарға һөртөргә, кипкәнсе тоторға. Кипкәс, йылы итеп урарға. Был дауаны һауыҡҡансы көн аша эшләргә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Эскелек менән мауығыуҙың бар яуыҙлығын аңларға мөмкинлек һәм был мауығыу тоҙағына эләккәс, унан сығырға рух көсө биргән, дөрөҫ йүнәлеш күрһәткән һәм ошо юлда нығытҡан Аллаһы Тәғәләгә мең рәхмәтлемен.*



*УҠЫТЫУСЫҒА ҠУЛЛАНМА*



# ДИН ҺӘМ МӘҘӘНИӘТ

## Ун һигеҙенсе дәрес: "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре"

Рәсәйҙә ислам тарихын үткән саҡта, милләт менән диндең бер үк төшөнсә булмауын тағы бер тапҡыр әйтеп китергә кәрәк. Ниндәй генә дин булмаһын, уның тыуған төбәге, тарала башлау тарихы бар. Ә халыҡ милләт булып дин таралғанға тиклем йәшәгән, ә динде аҙаҡ һайлап алған. Әле лә һәр бәлиғ булған кешенең дин һайлау хоҡуғы бар. Әммә ирекһеҙләү тыйыла. Был дәрестә дин аша тормошобоҙға килеп ингән үҙгәрештәр тураһында һөйләргә кәрәк. Уҡыусы үҙе уйлаһын һәм иҫкә төшөрһөн. Мәғрифәттәге үҙгәрештәр: мәҙрәсәләр асыу, китаптар нәшер ителеү, ғәрәп яҙмаһын өйрәнеү, сит илдәрҙә уҡып ҡайтыу, уҡымышлы кешеләрҙең артыуы инә. Көнкүрештә: дини йола-тәртиптәр тиҙ арала таралып китә һәм хатта илебеҙҙә динһеҙлек йылдарында ла ҡайһы бер йолалар һаҡланып ҡала. Ерләү йолаһы, мәрхүмдәрҙең өс, ете, ҡырҡ көндәрен, бер йыллығын үткәреү - иҫкә алыу. Хәҙер иһә никах уҡыу, балаға исем ҡушыу, дини байрамдарҙы билдәләү кеүек йола-тәртиптәр кире ҡайта башланы. Әммә динле булыу-булмау һәр кешенең үҙ иркендә.

## Ун һигеҙенсе дәрес: "Донъя диндәренең мәҙәниәт нигеҙҙәре"

Рус илендә христианлыҡ тиҙ генә таралып китмәй. Сөнки илдә төрлө өлкәләрҙә төрлө аллаға табыныу таралған була. Илебеҙҙең ҡайһы бер халыҡтарында икенсе төрлө ышаныуҙар әле лә һаҡлана. Рәсәй - ҙур ил, Рәсәйҙә бик күп төрлө халыҡтар йәшәй һәм төрлө дингә ҡарайҙар. Әммә милли айырмалыҡтар ҙа, дини айырмалыҡтар ҙа халыҡтар дуҫлығын ҡаҡшатмай, һәр милләт бер-береһенең үҙенсәлекле мәҙәниәтенә, тәғлимәтенә оло ихтирам һаҡлап, фәҡәт бер маҡсатҡа - татыулыҡ һаҡлауға, һыйышып тыныс йәшәүгә ынтыла. Илгә ябырылған иң ҙур афәт - һуғыш йылдарында фәҡәт татыулыҡ арҡаһында барыһы бергә тупланып еңеүҙәр яулап килде. Ә тыныс тормошта халыҡтар бер-береһенең ҡаҙанышынан файҙалана. Мәҫәлән, бынан йөҙ йыл элек Кирилл менән Мефодий уйлап сығарған алфавиттан барыһы ла файҙалана. Көнкүрештәге бөтөн фән һәм техника ҡаҙаныштары уртаҡ файҙаланыла. Бына шулай итеп, Рәсәй илендә йәшәүсе халыҡтар быуаттар буйы иңгә-иң терәшеп татыу йәшәй, ил саҡырһа, бер төптән ҡуҙғалып яуға ташлана.

## Ун һигеҙенсе дәрес: "Донъяуи этика нигеҙҙәре"

Башҡорттарҙа нәҫел һәм ғаилә бәйләнешен сағылдырып шәжәрә төҙөлгән. Шәжәрә төҙөүҙең әһәмиәте ҙур, сөнки, беренсенән, атай-олатайҙар ете быуын алмашынмайынса, үҙ-ара өйләнешеүҙе ҡәтғи тыйған. Икенсенән, кемдең кемгә туған икәнлеге асыҡ сағылған. Өсөнсөнән, шәжәрә тармаҡтарына ҡарап, һин нәҫелең алдында үҙеңдең яуаплылығыңды аңлайһың - быуаттар буйы тармаҡланып килгән нәҫел ағасы һинең исемең, һинең быуының менән тамамланып, иҫәпкә бар, һанға юҡ булып ҡалырға тейеш түгел. Ят бауырҙарға ул шәжәрәңдең кәрәге юҡ. Башҡорттарҙа тағы шундай йола булған һәм әле лә һаҡлана килә: шәжәрәне иң абруйлы кеше һаҡлай һәм үҙе өлкәнәйгәс, шәжәрәне һаҡлай һәм дауам итә алырлыҡ ғаилә ҡорған уланына тапшыра. Ә балалар шәжәрә буйынса ҡарап, иң затлы, иң абруйлы туғанына оҡшап үҫергә ынтыла. Шәжәрә темаһы "Тормош һабаҡтар"ының 6-сы класс, ә 2012 йыл нәшер ителгән дәреслектәрҙә 7-се класс дәреслегендә бик тулы итеп бирелә. Файҙаланығыҙ.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

*ӘЙҘӘ, ЭСМӘЙЕК!*

**Арыу ғына итеп һуғып алғандың иртәгәһенә баш ярыла яҙып ауыртыуына уянып киттем. Диуарҙарына тиклем тәмәке еҫе һеңгән бер бүлмәле фатир иртәгегә ҡарай тағы ла һаҫығыраҡ, сикәндергесерәк ине. Һуңғы шешәне сүп-сар биҙрәһенә лә еткерерлек хәл булмаған, күрәһең, ул аяҡ осонда тәгәрәп ята. Иҙән һыраға буялған. Сирҡаныс.**

# ТАМУҠТАН ҺУҢ...

## "айыҡлыҡ" тигән ожмахҡа юлыҡтым



Һуңғы ваҡытта күңел асыуҙар, шешә бушатыуҙар ғәҙәти хәлгә әйләнеп бөткәйне инде. Тышҡы яҡтан был иртә һуңғы ай-ай ярымдағы һәр иртәгә хас. Бер диванда фатир хужаһы, афған һуғышы ветераны, хырылдауы менән ҡурҡыныс тауыштар сығара, ҡараңғылыҡҡа күмелгән фатирға тағы ла ҙурыраҡ шомлолоҡ өҫтәй. Икенсеһендә, ауыр тын алып, фатирҙаш иптәш ята, өсөнсөһөндә - мин.

Эйе, тәгәрәп йөрөп эсмәһәм дә, ҡойһалар, баш тартмай торғайным. Компанияның үҙ кешеһе булыуҙың талабы ла ошо бит. Бушҡамы ни, компания өсөн монах та өйләнә, тип әйтмәйҙәр. Беренсеһен эсһәң, мотлаҡ икенсеһе, өсөнсөһөн һулаҡай ҡул менән төбөнә тиклем - мөхәббәт өсөн, дүртенсеһе... "А" ғына тип әйт, "Б" тип әйтергә мәжбүр буласаҡһың. Шуға ла "самалап" ҡына эсеүебеҙ, бөтәһен дә "хөрмәт" иткәнгә күрә, өсдүрт тапҡыр киоскҡа өҫтәмә яғыулыҡ артынан барып килгәндән һуң ғына тамамлана.

Бар нәмә лә ғәҙәттәгесә. Фатир ҙа, бәләкәй бүлмәне бүлешкән иптәштәр ҙә, иҙәнгә түгелгән һыра ла, тәмәке еҫе менән тулы һауа ла. Ғәҙәттәгесә, ләкин... Был иртә мин башҡа кеше булып уяндым. Башыма тай типкәнме ни. Беренсе тапҡыр хәлемдең ни тиклем мөшкөл икәнен аңланым. Упҡынға тәгәрәп барғанымды шәйләнем. Минең һайлаған юлым ошомо? Яҙмышымды шул афған ветераны кеүек селпәрәмә килтерәсәкменме? Эскелек һаҙлығына батҡан меңәрләгән, миллионлаған кешенең хатаһын ҡабатлаясаҡмынмы? Тағы 4-5 йылдан кем буласаҡмын? Ун һигеҙ йәштә үҙемде үлемгә дусар итәм түгелме?

Бөтөнләй эскене ташларға алдан да ниәтләнеп йөрөнөм, "йәшел йылан" менән мауығыуҙарым яҡшыға алып бармаясағын да күҙалларға була ине. Ләкин мин бит алкаштар кеүек көн һайын эсмәйем, самамды беләм, мулла түгелмен дә инде, тигән уйҙар, көн һайын яңы "идеялар" тәҡдим иткән дуҫтар ниәттәремде тормошҡа ашырырға кәртә була торғайны.

Сәйер төш тә күрмәнем шикелле. Үткән көн бер кем дә өгөтнәсихәт уҡыманы. Табипҡа ла эскелектән дауаланырға барманым. Аң, ҡараштар бер төн эсендә шулай итеп мистик рәүештә ҡырҡа үҙгәрә икән дә баһа! Башҡа көндәрҙән айырылмаған иртә, фатир, иптәштәр. Ләкин бөтөнләй башҡа ҡараш. Айыҡ ҡараш...

Был иртә мин алкоголдең, ниндәй генә исем аҫтында йәшеренмәһен, нисә генә процентлы булмаһын, ниндәй генә күләмдә ҡулланылмаһын, йәмғиәтте, кешелекте, кешене һәм мине тереләй күмер өсөн тәғәйенләнгән яуыз ағыу икәненә төшөндөм. Был иртә үҙен, ғаиләһен, бар туғандарын, яҡындарын, бар кешеләрҙе ҡайғыртҡан, киләсәге хаҡында уйлаған кеше, аңлы булһа, бер тапҡыр ҙа ауыҙына ошо ағыуҙы алмаҫҡа тейеш, алған икән, шунда уҡ төкөрөргә, ташларға, ҡоҫорға тейеш икәнлеген аңланым. Был ағыуҙы башҡаса яныма яҡын да килтермәҫкә үҙ-үҙемә һүҙ бирҙем.

Эйе, ҡараштарым бер төндә үҙгәрһә лә, янымдағы компанияның, мөхиттең үҙгәреүенә, дөрөҫөрәге, минең улардан ситләшеүемә күп ваҡыт үтте әле. Улар мине һаман табынға саҡырҙылар, хөрмәт итһәң - эс, тип иҫерткес һуҙҙылар. Ләкин әйтә алмаҫтай ҙур ихтыяр көсө тойҙом үҙемдә. Компаниябыҙҙа бер генә айыҡ тормош алып барыусы булмаһа ла, "аҡ ҡарға", "мулла" тип әйтеүҙәргә иғтибар итмәйенсә, үҙ юлымда булыуымды дауам иттем. Күңел асыуҙар, стакан күтәреүҙәр яҡшыға алып бармаясағын аңлатып та, әйтеп тә ҡараным. Ул саҡта мине бер кемдә тиерлек тыңламаны.

Был компания, шулай уҡ мәктәп йылдарында бергә шешә бушата башлаған таныштарым араһында, байрамда, "мәҙәни рәүештә", "интеллигенттарса" тип эсә башлауҙарына ҡарамаҫтан, бөгөнгө көнгә, 25-30 йәшкә, хроник алкоголиктарға әйләнеүселәр ҙә бар. Бик күп ҡыҙҙар, иҫерек рәүештә уйламай хаталы аҙымдар эшләп, бөгөн булһа ла ошо ҡылыҡтары өсөн үкенәләр. Яҡшы әсә була алырҙай, ғаиләләрендә насар булмаған тәрбиә алған был һылыуҙар, бар матурлыҡтарын, нәфислектәрен һәм паклыҡтарын araҡы, һыра, шарап, коктейль менән быҫратты. Тимер һындырырҙай көслө егеттәр 25-30 йәшкә бөгөлөп төштө. Ҡайһы берҙәре үҙ-үҙҙәренә ҡул һалды, икенселәренең тормошо, эсеүҙәре арҡаһында, фажиғәле рәүештә өҙөлдө.

Эйе, араларында һуңынан аҡылға килеп, яҡшы ғаилә ҡороусылар ҙа, эшкә урынлашыусылар ҙа бар. Әммә күптәр ошо үҫмерлек йылдарын башҡа ҡайтармаҫтай итеп, упҡынға ырғытты, бушлыҡҡа ташланы, үҙ-үҙенә дошман итте. Ҡайҙа булды беҙҙе тыйыусылар, ҡайҙа булды беҙгә дөрөҫ юл күрһәтә алырҙай ағай-апайҙар, оло быуын кешеләре? Әллә беҙ үҙебеҙ уларҙы ишетмәнекме? Әллә беҙҙе насарлыҡтарҙан тыйып та, үҙҙәренә ошо яман эштәрҙе эшләргә юл ҡуйыуҙарынан ғибәрәт икейөҙлөлөктө ҡабул итә алманыҡмы? Шуға тыңламаныҡмы?

Ноябрҙең ошо һыуыҡ иртәһен һәм шомло бер бүлмәле фатирҙы хәтеремә төшөрһәм, бар тәнем зымбырлап китә. Мөғжизә, тип кенә әйтә алам ул иртә хаҡында. Ҡараштарымдың бер төндә, күҙ йомоп асҡан арала, ул тиклем дә ҡырҡа үҙгәргәне юҡ әле. Мин быға нимә сәбәпсе булғанын бөгөн дә әйтә алмайым. Әсәйемдең, йә мине насарлыҡтарҙан ҡурсаларға тырышып йөрөгән таныштарымдың, йә дини кеше булған олатай-өләсәйемдәрҙең ихлас күңелдән әйтелгән доғаларылыр. Бәлки, бала саҡтан уҡ яҡшы кешеләр араһында йәшәгем, уҡығым, эшләгем килеүе һәм шундай кешеләргә тартылыуымдыр. Һис шикһеҙ, был Аллаһы Тәғәлә бүләге, Аллаһы Тәғәлә аманаты.

Алкоголде тормошомдан алып ташлауым миңә күп күренештәргә, ваҡиғаларға ҡарата яңы ҡараш асты. Пессимизм, битарафлыҡ, ғәфләт, өмөтһөҙлөк кеүек тойғолар күңелемдән юйылды. Кешеләргә ҡарата ышаныу артты. Эгоизм хаҡимлыҡ иткән заманда үҙ хәжәттәрен ситкә ҡуйып, башҡалар хаҡында ысын йөрәктән уйланып йөрөгән кешеләр, әҙәби әҫәрҙәрҙә генә түгел, тормошта ла булыуын күрһәтте, улар менән таныштырҙы. Элек үтә динлелектәре өсөн көлөп, мыҫҡыл итеп йөрөгән таныштарым ысын дуҫтарыма әйләнде. Яҡшы кешеләр бөтмәүенә, донъя ҡараңғылыҡҡа батмауына, күңелдәрендә изгелек һаҡлап, ошо изгелекте башҡаларға таратып йөрөүсөләр булыуына инандым.

Йәш саҡта уҡ, "йәшел йылан" үҙенә тартып алмаҫ элек, эскелек менән мауығыуҙың бар яуыҙлығын аңларға мөмкинлек һәм был мауығыу тоҙағына эләккәс, унан сығырға рух көсө биргән, дөрөҫ йүнәлеш күрһәткән һәм ошо юлда нығытҡан Аллаһы Тәғәләгә мең рәхмәтлемен.

**Мораҙым АЙСЫУАҠОВ.**

ТАРИХЫНДАН ДАН ТАП!

# БЫУАТ ТӨПКӨЛДӘРЕН БАЙҠАП

**"Үҙ халҡыңдың тарихын бел һәм һаҡла. Ул белем һинең рухыңды нығытыр һәм күтәрер, ауыр минуттарҙа көс бирер". Был һүҙҙәр күп халыҡтарҙың, шул уҡ ваҡытта башҡорттоң да намыҫ кодексына әүерелде. Мин дә үҙебеҙҙең төбәк тураһындағы ишеткән-белгән тарихи мәғлүмәттәр менән уртаҡлашмаҡсы булдым, башҡаларҙы ла шуға саҡырам.**



## Тарихи шәхестәр ҡасан йәшәгән?

Бөрйән районында "Бабсаҡ һәм Күсәк" эпосын белмәгән кеше юҡтыр. Быуаттар буйына быуындан-быуынға күсә килгән, нигеҙендә төбәгебеҙ тарихы ятҡан легенда берәүҙе лә битараф ҡалдырмай. Уның геройҙарына - тарихи шәхестәргә ҡарата иғтибар кәмемәй, тик арта ғына.

Эпоста бәйән ителгән ваҡиғаларҙың ҡайһы осорҙа, нисәнсе быуатта барыуы һаман бәхәсле булып ҡала. Был мәсьәләне ҡарағай-ҡыпсаҡтар шәжәрәһе ярҙамында сисергә мөмкин. Тарих фәнендә быуындар араһын яҡынса 25 йылға бүлеү ҡаралған, был күп тапҡыр тикшерелгән дөрөҫ ысул. Бөгөнгө көндә шәжәрә буйынса Бабсаҡ бейҙең 20-се быуын нәҫелдәре донъяға килде. 20 быуынды 25 йылға ҡабатлағас, 500 йыл килеп сыға. Бынан сығып, Бабсаҡ бей 500 йылдар элек, йәғни 1500 йылдарҙа йәки XVI быуат баштарында йәшәгән, тип әйтергә була.

Шәжәрә Бабсаҡ улы Күсәк бейҙең башҡорт делегацияһы составында Аҡ батшаға йәки Иван Грозныйға барып баш һалып (һүҙ - Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәй составына инеүе тураһында), ярлыҡауҙар алып, атлас кармазин тундар кейеп ҡайтыуын хәбәр итә. Был факт тағы бер тапҡыр Бабсаҡ һәм Күсәк бейҙәрҙең XVI быуатта йәшәүен иҫбатлай.

Бей - төрки халыҡтарының феодаль баҫҡысында хандан ҡала икенсе урын биләй һәм ҡәбилә, ырыу башлыҡтарына быуындан-быуынға тапшырылып килгән титул. Ырыу-ҡәбилә мөнәсәбәттәре юҡҡа сыҡҡас, бей титулы ла бөтөрөлә. Улар урынын дәүләт хеҙмәтендә торған тархандар ҡатламы биләй. Әлеге ваҡытта Төркиә һәм Әзербайжанда дәрәжәле ир кешеләргә исемдәренән һуң "бей" һүҙен өҫтәйҙәр. Башҡорттоң ҡайһы бер ырыуҙарында килен кешенең ҡәйнәһенә "бейем" тип өндәшеүе һаҡланып ҡалған.

Шәжәрәлә әйтелеүенсә, Бабсаҡ бей Турахандың ҡыҙына (ҡайһы бер сығанаҡтар буйынса, уның исеме - Бүләбикә, халыҡ телендә - Әминә) өйләнә. Турахан бөрйән, үҫәргән, тамъян башҡорттары шәжәрәләрендә, шулай уҡ "Үҫәргән тәүарихында" ла телгә алына. Хан XV-XVI быуаттар сигендә үрҙә телгә алынған бөрйән, үҫәргән, тамъян, ҡыпсаҡ ырыуҙары союзы башында торған булырға тейеш. Турахан XVI быуаттың тәүге яртыһында, Волганың түбән яғынан килгән нуғайҙар тарафынан үлтерелә.

## Шәжәрә тарихы

Шәжәрә - ер-һыу атамалары, легенда-риүәйәттәр менән бер рәттән, ҡайһы бер уйҙырма етешһеҙлектәренә ҡарамаҫтан, халҡыбыҙ тарихын өйрәнеүҙә ҡиммәтле документ - сығанаҡ булып тора. Шәжәрә төҙөлгәнгә тиклем дә башҡорт үҙенең ете быуын ата-бабаларын белергә тейеш булған. Еңел иҫтә ҡалдырыу маҡсатында, атайолатайҙар исемлеген шиғри юлдарға һалып ятлағандар. Үҫәргән ырыуы шәжәрәһенең бер өлөшө шиғыр юлдары менән төҙөлеүе лә боронғо традицияға бәйләнгәндер.

Үкенескә күрә, ҡарағай-ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһе ҡасан һәм кем тарафынан төҙөлә башлауы тураһында мәғлүмәт юҡ. Быны тик үҙ ырыуы тарихын, боронғо төрки телен белгән дини грамоталы кеше генә башҡара алыуы асыҡ. Шәжәрә XVII быуат урталарында, йә аҙаҡтарында яҙыла башланған булырға тейеш. Беренсенән, әгәр шәжәрә Күсәк бей осоронда яҙыла башлаған булһа, Күсәк менән Бабсаҡ тарихын бәйән иткәндән һуң: "Ошбу әйтүлгән барсылары Сыңғыҙ хан заманында ирди", - тип, ваҡиғаны XII - XIII быуаттарҙа йәшәгән Сыңғыҙ хан менән бәйләп ҡуймаҫтар ине. Сыңғыҙ хан күп ырыу шәжәрәләрендә телгә алына. Үҫәргән ырыуы шәжәрәһендә ырыу башы Мөйтән бейҙең Сыңғыҙ ханға барып, вәзир булып хеҙмәт итеүе хаҡында әйтеп кителә. Быңдай уйҙырмалар менән шәжәрә төҙөүселәр үҙ ырыуының бик боронғо һәм бөйөк шәхестәр менән бәйле булыуын иҫбатларға тырышҡандарҙыр. Икенсенән, XVI быуатта мәжүсилек хөкөм һөргән беҙҙең төбәктә шәжәрә төҙөрлөк муллалар булмағандыр. Йола буйынса тик ырыу баштары тарафынан телдән-телгә ятланып, быуындан-быуынға тапшырыла килгән.

## Ырыуыбыҙ башында кемдәр торған?

Шәжәрә буйынса, ырыуыбыҙға нигеҙ һалыусы - Бабсаҡ бейҙең етенсе быуын олатаһы Лоҡман Хәким. Кем ул Лоҡман Хәким? Аллаһы Тәғәләнең берлеген таныусы, Ислам дине барлыҡҡа килгәнгә тиклем үк күп нәсер, афоризм, әйтем, мәҡәлдәр ҡалдырыусы бөйөк аҡыл эйәһе. Сығышы менән Эфиопиянан Кесе Азияға килтереп һатылған ҡол негр. Йәшәгән ваҡыты бәхәсле, ә ҡәбере Израилдә. Бер сығанаҡтар уны Дауыт бәйғәмбәр осорона бәйләй, йәғни бынан 3 мең йылдар элек, икенсе мәғлүмәттәр буйынса, Мөхәммәт бәйғәмбәр заманында йәки VII быуатта Ислам динен ҡабул итә. Ҡыҫҡаһы, был ярым мифик персонаждың беҙҙең халыҡҡа бер ниндәй ҙә ҡыҫылышы юҡ. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, күп мосолман халыҡтары уны үҙенеке итеп ҡабул итә. Шулай булғас, ҡарағай-ҡыпсаҡ шәжәрәһендә ырыу башында Нух бәйғәмбәр тороуына ла ғәжәпләнергә ярамай.

Лоҡман Хәкимдең улы Дәшт ҡыпсаҡ. "Дәшт" фарсы телендә "дала" тигәнде аңлата. Мәғлүм булыуынса, X - XIII быуаттар эсендә ҡыпсаҡ ҡәбиләләре ауып алған Алтайҙан Дунайға тиклемге ғәйәт ҙур территория Дәшт ҡыпсаҡ (Дешт и Кипчак), йәғни ҡыпсаҡ далаһы тип йөрөтөлә. Дәшт ҡыпсаҡ иле йәки ҡыпсаҡ далаһы бер ваҡытта ла берҙәм дәүләт булып формалашмаған. Ваҡыт үтеү менән ҡыпсаҡтар башҡа төрки һәм төрки булмаған халыҡтар менән аралашып, ассимиляцияға бирелә. Әлбиттә, алыҫ Алтайҙа ҡыпсаҡ халҡына нигеҙ һалыусыларҙың береһе Ҡыпсаҡ ("имән ҡыуышы" һүҙенән) исемен йөрөтә. Был яҡынса VII - VIII быуаттарҙа, ә тарихсы-этнограф профессор Р. Кузеев һүҙе менән әйткәндә, быуаттар төбөндә юғала.

Дәшт ҡыпсаҡтың улы Рушан Нәби. Ғәрәп исеменән тәржемәһе "нурлы бәйғәмбәр". Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе шулай атағандар. Изге Ҡөрьән китабында ла Мөхәммәт бәйғәмбәр Нәби тип алына. Боронғо ваҡытта үҙ нәҫелдәрен изгеләр, бәйғәмбәрҙәр менән бәйләү бер башҡортҡа ғына хас булмаған. Артабан Исмәғил хандан һуң мосолман исемдәре бөтөп тора, боронғо мәжүси төрки исемдәр китә: Алмай, Ҡуҙы, Боҫҡон һ.б.

Дөрөҫ, составында Башҡортостан да булған Алтын Урҙа дәүләтендә ислам XIV быуат башында, 1312 йылда Үзбәк хан тарафынан рәсми дин итеп ҡабул ителә. Был ифрат ҙур биләмә, күп ҡусмә, ярым күсмә, ултыраҡ тормоштағы халыҡтарҙы үҙ эсенә алған дәүләттә бер XIV быуат эсендә барыһы ла ислам динен ҡабул иткән, тигәнде аңлатмай. Башлыса күсмә һәм ярымкүсмә халыҡтар диндең тәүге формаларын туплаған урындағы йола-ышаныуҙар һәм күк Аллаһы Тәңре ҡанундары менән йәшәүен дауам иткән. Нисек булһа ла, тарихи хронологияның йыраҡ торған. Заманына күрә уҡымышлы ата-бабаларыбыҙ төҙөгән шәжәрә борондан дөрөҫ һәм изге һаналған, нығ һаҡланған. Шәжәрә башындағы бер нисә исем шик тыуҙырһа ла, артабан исемлектә хаталар булыуы мөмкин түгел.

**Зәһир ДӘҮЛӘТБИРҘИН.**
**Бөрйән районы**
**Монасип ауылы.**
**(Дауамы бар).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Ижтимағи мөнәсәбәттәр, ҡәбилә һәм ырыу бүлексәләре

**Ҡаҙан олоҫо даруғаһы**

15. Гәрәй - Ағиҙел йылғаһы буйында; ике яр буйлап урман, ялан.

16. Йәлдәк - Ҡояш буйында; яландар, имән урманы.

17. Йәнәй - Ыҡ һәм Ағиҙел йылғалары, Кама йылғаһы арьяғы буйында; урман, ялан.

18. Тышҡы Йылан - Баҙы һәм Ыҡ түбәләҫтәре һәм башҡа йылғалар буйында; урман, ялан.

19. Ҡырғыҙ - Сөн һәм башҡа йылғалар буйында; урман, ҡырҙар.

20. Байлар - Кама, Иж, Минзәлә (Мейзеле) һәм башҡа йылғалар буйында; урман-яландар.

21. Ғәйнә - Ыҡ буйында.

**Уса даруғаһы олоҫтары**

1. Таҙлар - Ҡыҙғына (Кизгеня) йылғаһы буйында; имән урманы һәм яландар.

2. Уран - Буй йылғаһы буйында; ҙур урмандар, яландар ҙа бар.

3. Ғәйнә (Ганинская) - Толва буйында; ҙур урмандар, ҙур булмаған яландар, тауҙар бар; урман артындағы был олоҫҡа тиклем 60 саҡырым, Өфө ҡалаһы яғынан һаҙлыҡтар аша арба юлы юҡ.

4. Ирәкте - Танып һәм башҡа йылғалар буйында; урман, ҙур булмаған яландар.

Һаҡланып ҡалған документтар буйынса, XVII быуаттың беренсе яртыһында бер үк атамалы олоҫтар төрлө дарұғалар эсендә булған. Мәҫәлән, Бөрйән - Ҡаҙан һәм Нуғай дарұғаларында, Дыуанай һәм Елдәк - Ҡаҙан һәм Себер дарұғаларында.

Башҡорттарҙы 1735 йылғы олоҫтар һәм ырыуҙар буйынса бүлеү исемлегендә 44 олоҫ һәм ырыу теркәлә. Шулай уҡ бында ошо ырыуҙарҙан барлыҡҡа килгән аймаҡтар һәм түбәләр исемлеге лә бирелә. Мең ырыуында аймаҡ һәм түбәләр һаны - 9, Юрматыларҙа - 7, Ҡыпсаҡтарҙа - 5, Бөрйәндәрҙә - 4, Көҙәйҙәрҙә - 5, Таныптарҙа -3, Әйлеләрҙә - 11, Ҡыуаҡандарҙа - 2, Ҡара-Табындарҙа - 9, Каршиндарҙа - 3, Дыуанайҙарҙа - 4.

Башҡорт старшиналарының телдән әйтелгән күрһәтмәләре нигеҙендә 1737 йылда төҙөлгән документтарҙа Табын түбәһенә ингән - 11, Ҡатай түбәһенә ингән - 10, Әйле түбәһенә ингән 10 олоҫтоң исемлеге бирелә.

XVII - XVIII быуаттарҙа "аймаҡ" һәм "түбә" терминдары ҙур ырыу йәки олоҫ эсендә ғаилә-ырыу һәм территориаль берәмектәрҙе билдәләү өсөн күп тапҡырҙар ҡулланыла. "Аймаҡ" - монгол осоронда ҡулланылышҡа инә һәм туғанлыҡта булған бер нисә ғаиләнең берлеген аңлата; "түбә" - территорияны аңлата, ғәҙәттә, ул ниндәйҙер аймаҡҡа ҡараған көтөүлек территорияһын күрһәтә. Боронғо ырыуҙар аймаҡтарға тарҡалғанда, һуңғылары ваҡыт үтеү менән үҙ аллы ырыуға йәки олоҫҡа әүерелә һәм артабан халыҡтың үҫеше һөҙөмтәһендә айырым олоҫтарҙың халыҡ составы ла үҙгәрә.

**(Дауамы бар).**

# Мөхәббәт, ныҡлыҡ нигеҙе

**Мөхәббәт уға ышанғандарға ғына бәхет килтерә, тигәндәрен ишеткәнегеҙ барҙыр, моғайын. Бөгөн йәмғиәтебеҙҙә ғаилә ҡиммәттәрен бөтөнләй икенсе, матди төшөнсәләр алыштырып бөтөп барған заманда ла мөхәббәтле булыуҙары менән донъялары ла, бәхеттәре лә түңәрәк парҙарҙы күргән һайын был һүҙҙәрҙең ысын икәненә ҡабаттан инанаһың. Өфө ҡалаһында йәшәүсе, бынамын тигән өс баһадир ул үҫтереүсе Вәлиевтар ҙа, ныҡлы ғаиләнең нигеҙендә тап мөхәббәт ята, тип иҫбатлай. Ғаилә башлығы Рәмил Рауил улы - эске эштәр хеҙмәте подполковнигы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, бына байтаҡ йылдар инде БР буйынса Эске эштәр министрлығының Мәҙәни үҙәге етәксеһе булып эшләй. Фәрзәнә Фәйзулла ҡыҙы "Эдвис" уҡытыу-методик үҙәгенең нәшриәт бүлегендә баш мөхәррир вазифаһын башҡара. Шулай итеп, уҡыусыларыбыҙ иғтибарына ВӘЛИЕВтар ғаиләһендә үткәргән түңәрәк ҡор йөкмәткеһен еткерәбеҙ.**

**Һәр ғаиләнең үҙенең танышыу, ҡауышыу тарихы була. Һеҙҙең ғаиләнең барлыҡҡа килеүенә нимә этәргес булды, бер-берегеҙҙе тәү башлап ҡайҙа күрҙегеҙ?**

**Рәмил:** Мин Белорет районының Абҙаҡ ауылында тыуып-үҫкәнмен. Тәбиғәттең үҙенән дә, нәҫелдән дә күскәндер - бәләкәйҙән йыр-моңға ғашиҡмын. Атай мандолинала уйнай, йырлай ҙа, әсәйем дә ваҡытында баянда уйнаған, улар икеһе лә уҡытыусылар. Мин иһә ҡурайға ныҒыраҡ тартылдым. Әммә мин мәктәптә уҡыған саҡта ауылда ҡурайсылар бөтөнләй булманы. Бер ваҡыт ауыл эргәһендә карьер асып ебәрҙеләр, Рәмил тигән бер ағай шунда вахта ысулы менән водитель булып эшләне. Беҙҙең ауыл малайҙарының бәхете асылды шулай, ул мәктәптә ҡурай түңәрәге лә алып бара башланы. Шулай ҡурайҙа уйнарға өйрәнеп, бәйгеләргә сыға башланыҡ. Бер тапҡыр Мәжит Алкин мине тыңлап ҡараны ла, Өфөгә, музыка мәктәп-интернатына саҡырҙы. Унан һуң Учалы музыка училищеһын, Өфө дәүләт сәнғәт академияһын тамамланым. Хәҙер ун ике йылдан ашыу Эске эштәр министрлығында эшләйем. Дуҫтар мине, шаяртып, Эске эштәр министрлығының мәҙәниәт министры тип йөрөтә. Тап моңға булған һөйөүебеҙ беҙҙе бер һуҡмаҡта тап итте лә инде.

**Фәрзәнә:** Мин ул саҡта Сибайҙа урта мәктәпте тамамлап, Өфө полиграфия училищеһында уҡып йөрөй инем. Йырларға яратҡан кеше буларак, йыр түңәрәгенә лә йөрөйөм. Шунда Рәмил менән танышып киттек. Уның Салауат ағаһы баянда, Рәмил ҡурайҙа уйнай, мин йырлайым, үҙем ижад иткән шиғырҙарҙы һөйләйем. Студент саҡта яҙған шиғырҙарыма композитор Илшат Хәлилов бер нисә матур йыр ҙа яҙғайны. "Икәүләшеп, етәкләшеп", "Әҙәм йөрәге йоҙаҡ", "Һай, афарин, һалдаткайым" тигән йырҙарым тамашасыға Нәзифә Ҡадирова, Рәзилә Ерьесова, Гөлгөнә Баймырҙина башҡарыуы аша таныштыр. Әлеге көндә лә шиғыр яҙырға теләк тә, әүәҫлек тә бар, тик ваҡыт етмәйерәк тора.

Беҙгә ул ваҡытта ун етешәр генә йәш булған. Шулай дуҫлашып йөрөнөк тә, егерме йәшебеҙ тулғас, өйләнештек. Мин ул саҡта БДУ-ның филология факультетында - икенсе, Рәмил Өфө сәнғәт академияһының өсөнсө курсын тамамлағайны.

**Бөгөнгө заман күҙлегенән сығып ҡарағанда, һеҙ бик йәшләй өйләнешкәнһегеҙ. Бындай етди аҙым яһарға ҡурҡманығыҙмы һуң?**

**Рәмил:** Ҡатыныма: "Ун һигеҙ йәштә өйләнешнәк, тағы ла яҡшыраҡ булыр ине", - тип шаяртып әйтеп алам. Элек халҡыбыҙҙа ир баланы иртә өйләндереү, ҡыҙҙарҙы тағы ла иртәрәк кейәүгә биреү күренеше булған бит. Башта атай менән әсәй ярҙам иткән, аҙаҡ йорт һалып, айырым сығарғандар. Был тәрбиәүи йәһәттән дә бик дөрөҫ аҙым булған. Үҙебеҙҙең миҫалдан сығып ҡына әйтәм - йәшләй ҡоролған ғаиләләр ныҡ була. Беренсенән, бер-береңә һәм холоҡтарҙы өйрәнеү йәһәтенән иң уңайлы мәл. Унан һуң, йәш саҡта мөхәббәт тә саф була, бер-береңде ныҒыраҡ һәм эскерһеҙ яратаһың.

**Фәрзәнә:** Ике көс берләшкәс, тағы ла көслөрәк булып китәһең. Атай-әсәйҙәр башта, йәшһегеҙ бит әле, тип әйтеп ҡарағайны ла, беҙҙең ҡарарыбыҙ ныҡлап, етди итеп уйланылғайны. Өйләнешмәү, уны кисектереү уйыбыҙҙа ла булманы. Көндөҙгө бүлектә уҡып бөттөк, уҡыған саҡта эшләп тә йөрөнөк. Мин, мәҫәлән, БР-ҙың Милли китапханаһында һирәк китаптар бүлегендә эшләнем.

**Рәмил:** Ҡайһы бер кеше, тегегә өлгәшәйем, быныһын булдырайым, тип, ғаилә ҡороуҙы кисектерә, һөҙөмтәлә, ғаилә мәсьәләһе артҡа күсә лә ҡуя. Ҡайһылыр ваҡытта мал, дан артынан ҡыуып, ысын тойғолар тупаҫланып китә. Иҫәп-хисап өҫкә сыға, өйләнеүе лә иҫәп буйынса була. Әммә холоҡ үҙгәреп өлгөргәс, бер-береһенә яраҡлаша алмайҙар. Шуға айырылышыу осраҡтары йышайҙы хәҙер. Етмәһә, йәштәрҙә ирекле йәшәргә маташыу теләге көслө. Гражданлыҡ никахы тигән нәмә лә дөрөҫ түгел. Ул кешеләрҙең бер-береһе алдындағы яуаплылыҡтан, ғаилә мәсьәләләренән ҡасыуҙан барлыҡҡа килде. Бөгөн беҙ бергә йәшәйбеҙ, иртәгә йәшәмәйбеҙ, тип уйлайһың, уртаҡ маҡсаттар юҡ икән, ул ғаиләнең ниндәй киләсәге булһын?



*Кем был төбәктә йәшәй, урындағы халыҡтың телен, мәҙәниәтен белергә һәм ихтирам итергә бурыслы. Беҙ милләтсе түгел, әммә үҙебеҙҙең милләтебеҙҙе яратабыҙ һәм балаларыбыҙҙа ла үҙ халҡына һөйөү тәрбиәләргә тырышабыҙ, сөнки был рух иң тәүҙә ата-әсә тәрбиәһенән килә. Үҙебеҙҙең ғөрөф-ғәҙәттәрҙе өйрәтеп, йыр-моңобоҙҙо тыңлап үҫәләр, батырҙарыбыҙ тураһында һөйләйбеҙ, донъя кимәлендә дан алған эпостарыбыҙҙы өйрәнәбеҙ. Күпме әкиәттәребеҙ бар, улар электән тәрбиә ысулы итеп ҡулланылған. Рәми Ғарипов кеүек шағирҙарыбыҙҙың шиғырҙарын яттан беләбеҙ.*

**Фәрзәнә:** Ғаилә, балалар үҙ маҡсаттарыңа ирешеү өсөн ҡамасау түгел. Киреһенсә, күп нәмәгә өлгөрөргә тырышаһың. Ғаилә лә, эш тә бер юлы бара. Балалар бәләкәй саҡта 205-се балалар баҡсаһында тәрбиәсе булып эшләнем. Был осорҙа Рәмил икенсе юғары белем алды. "Эдвис"ҡа күскәс, ике китабым сыҡты, береһе балалар өсөн күргәҙмә материал, 2011 йылда күп йылдар йыйған материал менән "Иң изге теләктәр" тигән ҡотлауҙар тупланған китап донъя күрҙе. "Мөхәббәт, татыулыҡ һәм иманлы булыу" тигән девиз менән йәшәй ғаиләбеҙ.

**Рәмил:** Шулай уҡ тырыш һәм маҡсатлы булыу мөһим. Дәртләнеп алға һәм алға ынтылыу йәшәү дәрте лә бирә, бер-беребеҙҙе ялҡытмайбыҙ ҙа, хатта эш буйынса бер көнгә генә ҡайҙалыр китергә тура килһә, юҡһыныуыбыҙҙан йоҡлай ҙа алмайбыҙ. Шуға, ҡайҙа барһаҡ та, ҡайҙа йөрөһәк тә гел бергәбеҙ.

**Ҡала шарттарында балалар тәрбиәләү еңел эш түгел, сөнки бында милли үҙенсәлектәрҙе һаҡлап ҡалыуы ауыр. Улдарығыҙҙы тәрбиәләгәндә нимәгә күберәк иғтибар бирәһегеҙ?**

**Рәмил:** Ҙур ҡалала йәшәгәс, аралашыу дәүләт кимәлендә урыҫ телендә барғас, улдарыбыҙ ҙа өйҙән тыш ошо мөхиткә эләгә. Быға тиклем дәүләт теле буларак башҡорт теленә баҫым нығыраҡ яһала ине, хәҙер уны ситкәрәк тибәрҙеләр, быны бер ҙә хупламайым. Кем был төбәктә йәшәй, урындағы халыҡтың телен, мәҙәниәтен белергә һәм ихтирам итергә бурыслы. Беҙ милләтсе түгел, әммә үҙебеҙҙең милләтебеҙҙе яратабыҙ һәм балаларыбыҙҙа ла үҙ халҡына һөйөү тәрбиәләргә тырышабыҙ, сөнки был рух иң тәүҙә ата-әсә тәрбиәһенән килә. Үҙебеҙҙең ғөрөф-ғәҙәттәрҙе өйрәтеп, йыр-моңобоҙҙо тыңлап үҫәләр, батырҙарыбыҙ тураһында һөйләйбеҙ, донъя кимәлендә дан алған эпостарыбыҙҙы өйрәнәбеҙ. Күпме әкиәттәребеҙ бар, улар электән тәрбиә ысулы итеп ҡулланылған. Рәми Ғарипов кеүек шағирҙарыбыҙҙың шиғырҙарын яттан беләбеҙ.

Илһөйәрлекте киңерәк мәғәнәлә ҡарағанда, ир-егет үҙе өсөн тыуа, иле өсөн үлә, тип бушҡа ғына әйтмәгәндәр. Ил, милләт кимәлендәге мәсьәләләргә, сәйәсәт булһынмы ул, башҡа өлкәме, ирмен тигән ир кеше бер ҡасан да вайымһыҙ булырға тейеш түгел. Быларын да күңелдәренә һеңдереп үҫтерәбеҙ улдарыбыҙҙың.

**Фәрзәнә:** Башҡорт донъяһында башҡорт рухлы итеп тәрбиәләр өсөн улдарыбыҙҙы махсус рәүештә 20-се башҡорт ҡала гимназияһына уҡырға бирҙек. Азамат менән Йәнбулат музыка мәктәбендә лә, "Нефтсе" мәҙәниәт һарайына "Вираж" халыҡ бал бейеүҙәре түңәрәгендә лә шөғөлләнә. Бәләкәсебеҙ Нурсолтан әле балалар баҡсаһында.

**Рәмил:** Өсөһөнөң дә йырға һәләттәре бар: Азамат думбыраға ҡушылып йырлай, Йәнбулат ҡумыҙҙа уйнай. Хәҙер уларҙы ҡурайҙа өйрәтә башлармын, тием, сөнки ысын башҡорт егете ҡурайҙа ла уйнай белергә тейеш. Һүрәт төшөрөргә яраталар, хатта өлкән улым художество мәктәбенә бирегеҙ, тип тә йөрөнө. "Улым, ҡабаланмай тор, уйҙарың төрләнер әле", - тип туктатып торҙоҡ. Әлеге мәлдә, хәрби булам, тип тырышып йөрөй. Уртансыһы табип булырға хыяллана. Шулай уҡ Йыһан менән дә ҡыҙыҡһыналар, ҡайҙан килеп сыҡҡанбыҙ, Ер нисек барлыҡҡа килгән, сит планеталарҙа тереклек бармы, юҡмы - ҡыҙыҡһыныуҙары сикһеҙ, һорауҙары ла күп, яуап биреп өлгөр генә. Беҙ шундай ҡараштабыҙ, мотлаҡ рәүештә йә хәрби, йә табип, йә башҡа һөнәр эйәһе була, тигән маҡсат ҡуймайбыҙ. Беренсенән, аҡыллы, тормошҡа һәләтле кеше булһын, ниндәй генә йүнәлеш алһа ла, тормошҡа әҙерлекле булырға тейеш. Икенсенән, иманлы һәм яҡшы белем алырға тейеш. Ә һөнәрҙе үҙҙәре һайлар.

**Фәрзәнә:** Улдарыбыҙҙың "Күҙ ҡурҡа, ҡул эшләй" тигән яратҡан әйтеме бар. Төптән уйлап хәл итә беләләр. Мәҫәлән, табип булыу өсөн нисек уҡырға, нисек операциялар яһарға өйрәнергә икәненә тиклем әле үк ҡайғырталар. Улар хатта минең ҡатыным ниндәй булыр икән, тип тә уйлайҙар.

**Рәмил:** Яйлап ғаилә тормошона ла әҙерләй башлайһың инде. Форсаты сыҡһа, "Улың булһа, бына һин дә шулай тип әйтерһең, шуны өйрәтерһең", тип әйтеп ебәрәм, күңелдәренә ор-

✓ *Кеше фатирын ҡуртымға алып торғансы, үҙ фатирың өсөн түләү күпкә уңайлыраҡ. Бөгөн дәүләттән көтөп ултырыу урынһыҙ, шуға ла йәштәргә, ҡурмайынса, ипотека алығыҙ, тип кәңәш итер инем.*

лоҡ һалам. Бейеү түңәрәгендә башҡа милләт ҡыҙҙары күберәк, бейеүҙәренең аҙмаларын ҡарағанда, беҙҙең башҡорт ҡыҙҙары тағы ла матурыраҡ, һөйкөмлөрәк, тип әйткән булабыҙ. Ике милләт араһында мөхәббәт булған осраҡта ла тарҡылашыу осрағы килеп сығасаҡ. Шуға улдарыбыҙҙа милли рухты һаҡлап ҡалһаҡ, киләсәктә икенсе милләт ҡыҙына өйләнеү тигән уй уларҙың башына ла инеп сыҡмаясаҡ.

**Фәрзәнә:** Бала тәрбиәләгәндә нимәнелер яңылыш эшләйем, тип ҡурҡырға ярамай. Мин тәүгә әсәй булғанда 22 йәш ине. Иң тәүҙә балаға матур башҡорт исеме ҡушырға кәрәк икәнлеген аңлай инек йәш булһаҡ та. Башҡорт халҡы бушҡа ғына "Яҡшы һүҙ - йән аҙығы" тимәгән бит. Һәр һүҙ, тимәк, исем дә энергетик көскә эйә. Исеме матур, мәғәнәле булһа, бала дөрөҫ исем менән тормош башлай, ә ҡалғаны тәрбиә менән бирелә. "Атай", "әсәй", "мәмәй", "тәтәй" лаусы, ҡатын иһә балаларҙы ҡараусы, донъяны ипле, йәмле итеп тотоусы. Бар ғаиләләр ҙә бына ошо ябай ғына ҡағиҙәне иҫтә тотоп йәшәһә ине. Йәмғиәттә ирҙәрҙең роле түбәнәйеп китте, ир баланы тәрбиәләүҙә лә етешһеҙлектәр тулып ята. Хәҙерге ваҡытта ирҙәр донъя көтөргә ҡурҡа. Ҡатыным эшләр әле, ата-әсәләр йыйылышына ҡатыным йөрөр әле, ҡатынымдан һорармын әле, тип енелгә һалышып бөттөләр. Бына шуға ла атай абруйын кире ҡайтарыу, бигерәк тә беҙҙең милләт өсөн бик мөһим.

**Фәрзәнә:** Балалар беҙҙең мөнәсәбәттәрҙе күреп үҫә. Әгәр ҙә мин иремде хөрмәтләмәһәм, балалар ҙа аталарын ихтирам итмәйәсәк - быны мин яҡшы аңлайым. Икебеҙ ҙә эшләгәс, өлгөрә алмай киткәндә бер-беребеҙгә ҡулалмаш та булып китәбеҙ.

**Рәмил:** Тик ҡатыным үҙе өйҙә булғанда минең ҡашығаяҡ араһында ҡыҫылып йөрөүемдә **релмәй генә, артыҡ ҡатыраҡ та итеп тәрбиәләй. Психологтар бына яңылыш алым, тип иҫәпләй. Һеҙҙең малайҙарға иркәләү йыш эләгәме?**

**Рәмил:** Әлдә ни иркәләтмәйбеҙ, әммә ҡаты ла тотмайбыҙ. Ир баламы, ҡыҙ баламы, быныһы мөһим түгел, уға бәләкәй саҡтан тулы мөхәббәт бирергә кәрәк. Яратыу булмаһа, бала ҡаты күңелле булып үҫә, үҙенең кәрәклеген тоймай. Бала яратыуыңды тойорға, һинең тормошта ниндәй генә ауырлыҡтар булмаһын, терәк буласағына ышанырға тейеш. Баланы иркәләтеү - ул алдына алып һөйөп ултырыу ғына түгел бит.

**Фәрзәнә:** Артыҡ ныҡ маҡтап ташламаһаҡ та, лайыҡ икән, мотлаҡ был турала әйтәбеҙ. Тағы ла дәртләндереп ебәреү баланың күңелен үҫтерә, үҙенә ышанысын арттыра.

**Рәмил:** Ейәндәрҙе бер туҡтауһыҙ яратып тороу олатай менән өләсәй өлөшө инде ул. Кани-һеңгән. Өфөнән ер алып, йорт төҙөргә мөмкинлек булмағайны, тоттоҡ та Абҙаҡ ауылында йорт һалдыҡ. Әлбиттә, уны башта уҡ һатыр өсөн төҙөгәнебеҙҙе белә инек, шулай булһа ла үҙебеҙгә тәғәйенләгән кеүек, яратып эшләнек. Шулай тәүге игенә туплап, ипотекаға Өфөлә фатир алдыҡ. Кредиттан да, ипотеканан да ҡурҡып торорға ярамай, ҡартайғас, фатир ҙа кәрәкмәй, йәш саҡта булдырып, рәхәтләнеп йәшәргә кәрәк, тигән фекерҙәмен.

**Фәрзәнә:** Кеше фатирын ҡуртымға алып торғансы, үҙ фатирың өсөн түләү күпкә уңайлыраҡ. Бөгөн дәүләттән көтөп ултырыу урынһыҙ, шуға ла йәштәргә, ҡурмайынса, ипотека алығыҙ, тип кәңәш итер инем. Ҡайһы бер кешеләр: "Йоҡлар алдынан көн һайын валидол эсәһегеҙме", - тип һорай. Ә беҙ ул ипотека тураһында уйлағаныбыҙ ҙа юҡ.

**Рәмил:** Ҡаланың ығы-зығыһынан ял итеү, мөхитте алышты-

уны ярты һүҙҙән аңлайһың, кәрәкмәгән саҡта артыҡ һүҙеңде әйтмәйһең, ауыртҡан яғына бер ваҡытта ла баҫмайһың, атай-әсәйҙәреңде ҡәҙерләйһең, һине тәрбиәләп үҫтергән кешеләреңә һүҙ тейҙермәйһең.

▸ **Яңы йыл байрамдарын нисек ҡаршылайһығыҙ? Үҙегеҙҙең ғаиләгә генә хас йолалар бармы?**

**Фәрзәнә:** Улдарыбыҙ Яңы йылды һәр ваҡыт һағынып көтөп ала. Ҡыш бабай беҙгә ниндәй бүләк алып килер икән, тип баш ваталар. Үҙҙәре лә Ҡыш бабайға бүләк әҙерләйҙәр - көндәлектәрендәге "бишле" билдәләрен һанап, әҙерләп ҡуйлар: быйыл улар Ҡыш бабайға "биш"тәрҙе күберәк алып килгәндәрме, әллә әҙерәкме? Шулай уҡ Ҡыш бабайға алдан ант итеү хаттары әҙерләйҙәр, унда яңы йылда үҙҙәрен нисек итеп тотасаҡтары, ниндәй маҡсаттар ҡуйыуҙары тураһында яҙалар. Унда тағы ла шундайыраҡ юл-

# ТАТЫУЛЫҠ, ИМАН –
## ошолар инде

тип теле башҡортса асылһа, был үҙе үк баланы дөрөҫ тәрбиәләүең тураһында һөйләй ҙә инде. Һикерткестәр, сабыйҙы үҫтереүсе тағы әллә күпме әйткестәр халыҡ педагогикаһында тулып ята. Иң ҡыҙығы, быларҙың береһен дә махсус китаптар уҡып, ятлап ултырмайһың, улар барыһы ла әсә кешенең күңелендә була, мәле еткәс, иҫкә төшә генә. Сөнки үҙебеҙҙе лә шул рәүешле тәрбиәләгәндәр, хәҙер беҙ шуларҙы ҡабатлайбыҙ ғына.

**Рәмил:** Фамилиябыҙ Вәли исеменән, Әл-үәли - "әүлиә" тигәнде аңлата. "Һинең әл-үәлиҙәрең, йәғни, әүлиәләрең булыр", - тип әйткән ти Аллаһы Тәғәлә Мөхәммәт бәйғәмбәргә. Шунан Вәли исеме килеп сыҡҡан. Һүҙ көсөнә ысынлап ышанам мин. Азамат - "ысын егет", "бөйөк" мәғәнәһен белдерә. Йәнбулат - "ике ғүмерле", "ике йәнле" тигәнде аңлата. Өсөнсө улыбыҙға ла исемде оҙаҡ һайланыҡ. Ишмулла тигән исемде лә күҙ уңында тотҡайныҡ. Хәҙер ҡарайым да, Нурсолтан тигән исем уға нығыраҡ килешә, ул ысын мәғәнәһендә идарасы, исеме есеменә тура килә. Әммә ул ябай ғына солтан түгел, нурлы солтан.

▸ **Халыҡта "Ир -баш, ҡатын - муйын" тигән мәҡәл бар. Был ҡанун һеҙҙең ғаиләлә һаҡланамы?**

**Рәмил:** Мин ҡатынымдан бик уңдым, сөнки ул ысын башҡорт рухындағы ғаиләлә тәрбиәләнгән. Бының өсөн ҡайным менән ҡәйнәмә рәхмәт. Халҡыбыҙҙың йолаларын ихтирам иткән ғаиләлә атай - баш, хужа кеше, әсәй - тәрбиәләүсе, атайҙың абруйын тотоусы. Ир мал табыусы, донъяны хәстәрләүсе, бар-өнәмәй. Үҙем дә унан күрәләтә ир эшен эшләтеп ултырмайым. Шулай ҙа мин ҡатынымдың эшләмәй өйҙә ултырыуын теләр инем, сөнки олатай-өләсәйҙәр йыраҡта булғанда, өс балаға тәрбиә биреү өсөн әсәй кешенең өйҙә ултырыуы дөрөҫөрәктер. Икебеҙ ҙә эштә булған осраҡта, кәм тигәндә ун ике сәғәт өйҙә тормайбыҙ. Ял көндәре лә йышыраҡ киләһе эш аҙнаһына әҙерлек менән үтә. Заманса йәмғиәттә төрлө яман ҡылыҡтарға өйрәнеп китмәһендәр, еренә еткереп тәрбиә алмаған балаларға эйәреп, холоҡтары насарайып, тормош юлдары боҙолоп китмәһен өсөн ошоларҙан ҡурсаларға ла кәрәк, тип уйлайым. Шуға, бала үҫкән саҡта уның бер минут та буш ваҡыты булмаҫҡа тейеш. Һәр хәлдә, беҙ уларҙың көн тәртибен шулай төҙөгәнбеҙ. Мәктәптә дәрестәр ҙә күп хәҙерге ваҡытта. Ошо мәғлүмәтте дөрөҫ ҡабул итеп, тағы берҙе өйҙә ныҡытып ҡуйырға тейеш бала, сөнки бер темаһы ғына аңламай ҡалһалар ҙа, артабан китеүе ауырлаша.

▸ **Башҡорт халҡы ир баланы артыҡ иркәләтеүҙе хупламай, киреһенсә, хис-тойғоға би-**

кулға, ялға булһа ла ҡунаҡҡа йышыраҡ ҡайтырға тырышабыҙ. Уларҙы йәйләп үҙебеҙҙең яныбыҙға алырға ла уйлайбыҙ. Бала тәрбиәләүҙә олатай-өләсәйҙең роле ҙур, сөнки йәш саҡта күп нәмәне белеп тә бөтмәйһең. Минең үҙемдең Ғәлимә өләсәйем Учалы районында йәшәһә лә, балаларының һәр береһенә барып, бер-ике ай йәшәп китергә тырыша ине. Уҡытыусы булып эшләгән, хәтере шәп ине, беҙ унан ике меңгә яҡын мәҡәл-әйтемдәр яҙып алып ҡалдыҡ. Уларҙы ҡулланып, ғилми эш эшләп, китап сығарырбыҙ тигән уйыбыҙ бар. Бына ошо өләсәйемдең тәрбиә алымдарының ҡайһы берҙәрен бөгөн үҙебеҙ ҙә ҡулланабыҙ. Ул былай ғына аҡыл өйрәтеп ултырманы, ниндәйҙер осраҡҡа, килеп тыуған ваҡиғаға ҡарата файҙалы, тормошта булған берәй хикәйәтте һөйләп, һабағын да бирә ине.

▸ **Бөгөн торлаҡ мәсьәләһе күптәрҙең ауыртҡан урыны булып тора. Баш ҡалала үҙ мөйөшөңдө булдырыу еңел түгеллеген беләбеҙ, һеҙ нисек фатирлы булдығыҙ?**

**Рәмил:** Ир кеше үҙ ғүмерендә улдар үҫтерергә, шулай уҡ мотлаҡ рәүештә йорт һалырға ла тейеш икәнлеге бәләкәйҙән аңға

рып алыу өсөн баҡсабыҙ бар. Балаларҙы әҙерәк кенә булһа ла эшкә өйрәтеү ниәте менән дә алдыҡ уны. Түтәл ҡаҙыу, унда төрлө йәшелсә үҫтереү малайҙарға ҙур кинәнес бирә. Һарысай исемле бесәйебеҙ ҙә бар. Ҡалала йәшәп, йәнлек-хайуандарға ҡаныҡ булып үҫмәһендәр, тинек.

**Фәрзәнә:** Уны хәстәрләү шул тиклем оҡшай үҙҙәренә. Нурсолтан менән балалар баҡсаһынан ҡайтып килгәндә ул бөтәһе тураһында ла һорап сыға. "Атай өйҙәме, ағай өйҙәме, Һарысай өйҙәме?" Шулай үҙҙәренә күрә ғаилә ағзаһы итеп иҫәпләйҙәр бесәйҙе лә.

▸ **Үҙ-ара мөнәсәбәт йылылығын һаҡлауҙа төп шарттың ни икәнлеген әйтеп тә бул-май, ул күп төшөнсәләрҙән тора. Шулай ҙа ныҡлы ғаиләнең нигеҙендә нимә ята?**

**Фәрзәнә:** Һис шикһеҙ, мөхәббәт. Бер-береңде уйлап, ҡайғыртып тороу ҙа ғаиләне ныҡлы итә.

**Рәмил:** Бер яҡлы ғына бәхет булмай. Ир кеше лә, ҡатын кеше лә бәхетле булыуы ихтимал, шулай уҡ улар икеһе бергә лә бәхетле була ала. Әгәр ҙә улар бәхетте бер ғаиләлә, бер-береһе менән донъя ҡороуҙа эҙләһә, шул саҡта дөрөҫ була. Ғаиләнең ныҡлығы ла ошонан килә, һин

дар була: "Кешеләргә 57 сәғәткә күберәк йылмаясаҡмын, изге эштәрҙе 60 сәғәткә күберәк эшләйәсәкмен, атайым менән әсәйемә 80 сәғәткә күберәк ярҙам итәсәкмен, матур һүҙҙәрҙе көнөнә 7 тапҡырға күберәк әйтәсәкмен, китапты 30-ҙан күберәк уҡыясаҡмын". Яңы йыл төнөн балалар менән ҡаршыларға тырышабыҙ, уларға күберәк иғтибар итәбеҙ, сөнки был байрам - ғаилә байрамы, тип иҫәпләйбеҙ. Өҫтәлгә емеш-еләк, итле ризыҡтар ҡуябыҙ.

Гәзит уҡыусылар менән ғаиләбеҙҙең яратҡан тортын бешереү серҙәре менән уртаҡлашайым әле. Уның өсөн 3 йомортҡа, ярты банка ҡуйыртылған һөт, 1 ҡап майонез (250 г), ярты балғалаҡ сода, 1,5 стакан он кәрәк. Ризыҡтарҙың барыһын да бер һауытҡа һалып, оҙаҡ ҡына итеп болғатырға. Шунан һуң ҡамырҙы 4 өлөшкә бүлеп, йәймәләр йәйеп, духовкала бешерергә. Араларына крем һөртөп ҡатларға. Кремды 1 стакан ҡаймаҡҡа 2 ҡалаҡ шәкәр ҡомо ҡушып әҙерләйем. Крем ҡабарып торһон өсөн уны оҙаҡ итеп яҡшылап туҡыйыҙ. Һунынан торттың өҫтөн үҙегеҙгә оҡшағанса биҙәп ҡуйығыҙ.

*Улдарыбыҙ Яңы йылды һәр ваҡыт һағынып көтөп ала. Ҡыш бабай беҙгә ниндәй бүләк алып килер икән, тип баш ваталар. Үҙҙәре лә Ҡыш бабайға бүләк әҙерләйҙәр - көндәлектәрендәге "бишле" билдәләрен һанап, әҙерләп ҡуйлар: быйыл улар Ҡыш бабайға "биш"тәрҙе күберәк алып килгәндәрме, әллә әҙерәкме? Шулай уҡ Ҡыш бабайға алдан ант итеү хаттары әҙерләйҙәр, унда яңы йылда үҙҙәрен нисек итеп тотасаҡтары, ниндәй маҡсаттар ҡуйыуҙары тураһында яҙалар. Унда тағы ла шундайыраҡ юлдар була: "Кешеләргә 57 сәғәткә күберәк йылмаясаҡмын, изге эштәрҙе 60 сәғәткә күберәк эшләйәсәкмен, атайым менән әсәйемә 80 сәғәткә күберәк ярҙам итәсәкмен, матур һүҙҙәрҙе көнөнә 7 тапҡырға күберәк әйтәсәкмен, китапты 30-ҙан күберәк уҡыясаҡмын".*

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Был ғаилә тураһында шаярыу ҡатыш ябай ғына итеп "Уларҙың йортонда хатта бесәйҙәренә тиклем сикһеҙ бәхетле", тип әйтергә һәм ошо һөйләмдән һуң нөктә ҡуйғанда ла булыр ине. Һәр кем үҙ бәхетенә үҙе сәбәп, ти халыҡ. Йәшлек мөхәббәтен күҙ ҡараһылай һаҡлай һәм бәхетең үҙ ҡулыңда икәнлеген аңлай белгәнгә донъялары түңәрәк, улдары илгәҙәк Вәлиевтарҙың да. Яңы йылда ошондай ғаилә бәхете һәр кемегеҙгә насип булһын!**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**




Йомшаҡ көн диванда ҡайҡайып китеп эре ултыра Айрат. Туҡ. Ҡәнәғәт. Ашап та, эсеп тә туйған. Иренеп кенә ялп-йолп иткән төҫлө уттар йүгереге аҫтында доңҡолдаған музыка ритмына хәрәкәт иткән стриптиз бейеүселәрен күҙәтә. Әленән-әле һыңар күҙе улай-былай үткеләгән ҡыҙ-ҡырҡынға ла эйәреп киткеләй. Тик бөгөнгә ҡыҙҙар ҡайғыһы юҡ - арыҡтан. Бында бергә килгән иптәштәре Сергей менән Айбулаттың ҡыҫҡа итәктәр артынан сығып олаҡҡаны ла еткән. Уларға нимә - улар йәштәр, суҡыштарының һарыһы китмәгән, гүзәл заттың бер генә йылы ҡарашынан да кемгә барып иркәләнергә белмәй йөрөгән шаталаҡ көсөк ише тағыла ла китәләр. Улай тиһәң, Айрат үҙе лә әле ҡарт түгел, әммә ундай елғыуар сағын үткәргән, баҫыла, олпатлана төшкән. Һәр хәлдә, ун туғыҙ йәш менән егерме биш йәш араһында айырма бар бит.

Бөгөн бик елле эштең осона сыҡты улар. Улар, тигәне, Айраттың фирмаһы. Ҡатмарлы операцияны уңышлы тамамлап, ҙур ғына сумманы күсереп алдылар һәм әле шуның хөрмәтенә күңел асыуҙары. Төнгө клубҡа ике йәш коллегаһы менән килгәйне, ана бит, туйыныр-туйынмаҫ таралып бөттөләр, әйтерһең дә, шул ҡыҙҙарға өйләнәләр. Яңғыҙ булһа ла, ирәйеп, рәхәтләнеп ултыра егетең, ирәймәҫлек түгел шул, кеҫәһе тулы аҡса, донъяһы түңәрәк. Аҡыл менән эш итә, аҡыл менән көн итә белә. Ә бит барыһының да хәленән килмәй улай, килмәә-әәй.

...Атайһыҙ үҫте Айрат. Әсәһе, уҡыу-уҡытыуға мөкиббән китеп, тормоштоң күп кенә тәбиғи күренештәренән ситләшкән кеше булараҡ, уны утыҙ менән ҡырҡ араһында саҡ табып алған. Атаһы ла фәнгә бирелгән бер ғалим булған. Тиҫтә йылдар ағымында йондоҙҙар донъяһын ентекле өйрәнә торғас, үҙенең дә ер йәшәйешенән ярайһы уҡ алыҫлашҡанын тоймағандыр ҙа. Ана шул ике сәйер кеше ниндәйҙер бер ғилми институттың саңлы китапханаһында осраҡлы ғына йәнәш тура килеп, ни ғиллә менәндер бер-береһенә иғтибар иткән. Тик танышлыҡтарына дүрт ай тигәндә, туйға әҙерләнеп, башкөллө ер тормошо менән ҡайнап йөрөгән атаһы һис көтмәгәндә инфаркттан үлеп ҡуя. Ысынлап та, әсәһе әйтмешләй, ер кешеһенең йәшәйеше килешмәгәндер үҙенә. Һуңлап ҡына тапҡан бәхетен ҡапылдан юғалтҡан әсәһен киләсәккә өмөт өҙөүҙән Айрат үҙе ҡотҡарып ҡала. Күптән шатлыҡ-ҡыуаныс, ләззәт, рәхәтлек тойғоларын алмауға ризаһыҙлығын белдереп, тыпырсынып тулап ҡуя ул. Һәм ошо бер генә ҡымырйыуы әсәһен баҫҡан еренән көс, баҡҡан күгенән нур, һулаған һауаһынан шифа алдырып күкрәтеп ебәрә.

Өс йәшендә уҡый-һанай белде, дүрт-биштәрҙә һыу буйы поэмаларҙы шатырлатып ятланы, ҡатмарлы миҫалдарҙы бер тында сисеп һалды Айрат. Башланғыс синыфтарҙа ҡулында студенттарға көсләп тә тотторып булмаған томлыҡтар ҙа, фәнни китаптар булды. Ә мәктәбенең ниндәй даны ине! Ул олимпиадалар, конкурстар, семинарҙар, конференцияларҙа белеме менән тәжрибәле уҡытыусыларҙы, ғалимдарҙы аптыратып һалыр ине. Урта синыфтарҙа компьютерҙа төрлө программалар уйлап сығарып, ҡыҙыҡлы уйындар яһап, интернет селтәрендә аҙашып йөрөргә яратҡандарҙың һушын алды. Торабара был интернет донъяһы менән шул ҡәҙәре мауыҡты, тәүлектәр буйы ашау-эсеүҙе онотоп, ябай әҙәмдең аңы етмәгәндәй сайттар төҙөп, аралашыу селтәрҙәре булдырып ултырҙы. Әммә аҡылдың һәм андың һәр ваҡыт тик ыңғай эштәргә генә хеҙмәт итеүенә бер ниндәй ҙә гарантия бирелмәй икән шул. Айрат та ваҡыт үтеү менән интернетта файҙалы шөғөлдәргә ҡарағанда, ярамағандары ҡыҙыҡлыраҡ икәнде аңлап алды. Мәҫәлән, банктарҙың, хәйриә ойошмаларының сайттарына аҫҡыс яратыу, уларҙың кодтарын табыу, "йоҙаҡ"тарын емереп инеү йә булмаһа телефон селтәрҙәренә үтеп инеп системаларына зыян килтереү. Баштараҡ был эштәр бары паразитлыҡ күренеше генә булып күренә ине лә, бер көндө берәүҙең картаһынан йөҙ һум сисеп, телефонына күсергәс, был ысулдың килем тәмен дә тойҙо. Унан китте инде: берәүҙән биш йөҙ һум, икенсенән мең, һандарҙы бер урындан икенсе урынға шылдырыу, ҡайҙалыр ебәрелгән сумманы башҡа ояға күсереү...

Мәктәпте тамамлағас, әсәһе күпме генә өгөтләһә лә, ниндәй генә уҡыу йорттары үҙ ишектәрен ҡайыра асып саҡырһа ла, Айрат ары белем эстәргә ынтылманы. Сөнки ул инде дипломһыҙ ҙа аҡсалы булыу юлын белә ине. Тәүге йылдарҙы бүлмәһенә бикләнеп, бер үҙе, унан бер дуҫы менән, ике-өс йылдан дүрт-биш кешелек төркөм туплап, айырым фатирлы булып, интернет программалары яһаусы исеме аҫтында фирма ла асып ебәрҙеләр. Ямғырҙан һуң ҡалҡҡан бәшмәктәр ише булып ишәйгән фирмалар араһында пәйҙә булған был ойошманы, әлбиттә, берәү ҙә артыҡ тикшереп торманы. Теркәлгән сумманы ҡабул иттеләр ҙә, шапылдатып мисәт баҫып, лицензия бирҙеләр.

Әсәһе, был ерҙә йәшәүенең йыуанысы ла, ҡыуанысы ла, маҡсаты ла булған балаһын тәрбиәләүгә, үҫтереүгә, уҡытыуға бар көсөн һәм ваҡытын һалған әсәһе генә бошондо шикелле. Үҙенең ауыҙынан өҙөп, һәр тинен бары балаһының мәнфәғәтенә ебәргән, улының аңын үҫтергәндәй бар мөмкинселектәрҙе лә, матди яғына ҡарап тормаҫтан, ҡулланған, йылдар буйына бер тоҫһоҙ күлдәк менән кофтала йөрөп тә, эшләгән генә аҡсаһын балаһына кәрәкле китаптар һәм компьютер программаларына тыҡҡан әсәһе, эстән һыҙылды, буғай. Тик өндәшмәне. Һүҙһеҙ генә бер бөртөгөнөң аҡылын һәм белемен заманса ҡулланыуына күнде.

Ике-өс йылда күҙгә күренеп ҡалынайҙы Айраттың кеҫәһе. Ялтырап торған яңы офис техникаһы, яңы мебель, унан яңы маркалы машина, иркен фатир пәйҙә булды. Булған һайын нәфсе лә үҫә барҙы. Машинаны машина, ҡыҙҙарҙы ҡыҙҙар алмаштырҙы, улары тағы ла юғарыраҡ сығымдар талап итте. Сығымдары бурлыҡ сауҙаһын киңәйтә төштө.

Әсәһе бер ергә лә күсергә теләмәне. Кескәй генә ҡала ситендәге иҫке өйҙәрендә көн күреүен белде. Уның өсөн матди байлыҡ, донъя малы баһаһын юғалтҡан, дөрөҫөрәге, уның хаҡын белмәне лә, ул хаҡта уйлағаны ла булманы. Ялтырап торған иномаркаңды ла, күҙ ҙә йоммайынса, файҙалы китапҡа алмаштырыр кеше шул ул.

* * *

Офисҡа ингәс тә егеттәренең бер компьютер янына йыйылып көлөшөүҙәре иғтибарын йәлеп итте. Бик ҡыҙыҡлы нәмә тапҡандар, буғай. Яндарына бармайынса булдыра алманы. Был йәштәр бигерәк шуҡтар инде, әленән-әле нимәлер уйлап табып ҡына торалар. Һаман шул Андрей эргәһенә йыйылғандар. Гений инде егетең, гений.

- Йә, нимә бар унда? - Егеттәр шефтың һорауына тура яуап бирә һалмайҙар әле, бары ауыҙҙыран йыйып ала алмаған хәлдә ҡул биреп күрешәләр.

- Хәйерле иртә, Айрат Мансурович.

- Һаумыһығыҙ, шеф.

- Сәләм-сәләм. Йә, ни бар?

- Бына, Айрат Мансурович, Андрей тағы бер уйын уйлап тапҡан, ну, баш үҙендә!

Айрат компьютерға нығыраҡ эйелде, экранды сыбарлаған һандарҙың айышына төшөнөргә тырышты.

- Аңлат.

- Бында ҡатмарлы бер нәмә лә юҡ, - яңы мәктәп тупһаһын ашатлаған йәш малай ап-аҡ тарамыш бармаҡтарын клавиатура өҫтөндә күҙ эйәрмәҫ тиҙлектә йүгертте, - бына ошо системаға инәһең дә, мәғлүмәттәр базаһынан ҡырҡ-ҡырҡ биштән уҙған ҡатын-ҡыҙ номерҙарын һайлап алаһың. Унан уларҙы үҙемдең сайтҡа күсереп алам. Ары бер бәйләнеш операторҙарында ла булмаған номер булдырам да, шул адрестан бына ошо тексты баяғы телефондарға смс итеп ташлайым һәм рәхәтләнеп аҡсаларҙы ҡабул итәм. Вот и все.

- Ә ниндәй смс-ка улай аҡса ебәрәләр һуң? - Шеф егеттәрҙең дәррәү көлөүе аҫтында һаман эштең айышына төшөнә алмай.

- Уныһы инде бик ябай. "Әсәй, мин ауыр хәлгә эләктем. Тиҙ арала ошо номерға аҡса һал. Үҙем һуңынан шылтыратырмын" - бына шул ғына.

- Ҡабалармы һуң?

- Еще как! Көнөнә генә түгел, ике-өс сәғәттә үк килеп төшә аҡсалары. Аҙ ҙа ебәрмәйҙәр бит әле, өсәр, бишәр, хатта егермешәр мең осорғандары бар.

Айрат йәш хакерҙың уйлап табыу һәләтенә һоҡланмай булдыра алманы. Шаярып та, яратып та егеттең былай ҙа тәртипһеҙ булып тоҙышҡан сәсен усы менән ыуаланы:

- Ну шпана, башың алтын, премия булыр үҙеңә.

Йәштәр әле оҙаҡ ҡына был шөғөлдән ҡыҙыҡ табып шаулашты.

* * *

Аҙна азағында телефонына бер ят номер шылтыратты. Руль артында булғас, алмаҫҡа ла ине иҫәбе, тегенеһе бик-бик ныҡышҡас, күтәрҙе:

- Дә, тыңлайым.

- Алло, алло! Был Айратмы?

- Шылтыратыусы әллә һаңғырау, әллә шул ҡәҙәр ярһыған.

- Эйе - мин. Кем был?

- Был бит күрше Хәҙисә апайың, Айрат! Танынмыңмы? Номерыңды әсәйең бер биреп ҡуйғайны, ул-был хәлгә тип, шуны саҡ табып алдым бына...

- Ә нимә булды, Хәҙисә апай? - Айрат ирекһеҙҙән телефонын ҡолағынан ҡырғараҡ алды, аҡыра ғына бит әй.

- Ней бит, Айрат, әсәйең ауыр хәлдә бальнисҡа эләккән, әле эштән ҡайтһам, шулай тип торалар...

- Нимә булып китте икән, Хәҙисә апай? - Айрат үҙе лә апайҙан кәм ҡысҡырманы, буғай.

- Нимә булғанын аныҡ ҡына итеп әйтә алмайым, һәр хәлдә, нимәләр булғандыр... Атыу нишләп шәл генә бөркәнеп, банкка йүгергән, тиһең, ана шул банкттан сыҡҡан да тәгәрәгән инде. Ҡулына ҡайҙалыр ебәргән аҡсаһының квитанцияһын ҡыҫып тотҡан булған. Ул ҡайҙа ебәрҙе икән йыйған ғына пенсияһын...

Ары Айраттың һөйләшерлек тә, тыңлап торолоҡ та түҙемлеге ҡалманы. Телефонын ташланы ла, машинаһын үкертеп бороп, бар көсөн газға баҫты.

* * *

Аҙна буйы иҫенә килмәне әсәһе, аҙна буйы табиптар уны үлем тырнағынан йолҡоп алыу өсөн көрәште, Айрат аҙна буйы дауахана коридорында йәшәне, йүнләп ашамай-эсмәй һурыҡты, яңаҡтарын һаҡал-мыйыҡ баҫты. Нимә генә уйламаны, нимәләр генә кисермәне ул. Быға тиклем ҡайһы саҡта хатта көндәр буйына бер генә лә иҫенә төшөрмәгән әсәһе хаҡында бер генә минутҡа онотоп ҡуйыуҙан ҡурҡты. Мәктәптә уҡыған саҡтарында әсәһенең үтә ябай кейенеүенән, башҡа малайҙарҙың әсәһе кеүек биҙәнеп-яһанып йөрөмәүенән оялыуын, әсәһе хаҡында артыҡ һөйләшергә яратмауын иҫләп оялды. Ғүмер буйы сабыйҙарса бер ҡатлы булғаны өсөнмө, әллә тормошҡа бер талабы ла, дәғүәһе лә булмағанынанмы, уны артыҡ етди ҙә ҡабул итмәүенә үкенде. Илай ҙа алманы, исмаһам. Бары башы сатнағансы ҡаштарын йыйырып, эстән һыҡраны, ахырҙа, маңлайына һыр булып тәүге бураҙна ятты, ҡарашына һағыш уйылды.

Ниһайәт, әсәһе иҫенә килде. Әлбиттә, ул бит үлергә тейеш түгел, ул бит әле йәш. Айрат табиптан биш кенә минут һорап алып, палатаға инде лә,

ҡаршы ултырғыҫҡа терәлеп, әсәһенең кескәй генә һалҡын ҡулын ҙур устарына ҡыҫты, ыуаланы, өрөп йылытырға итте, сикәһенә, ирендәренә терәне.

- Ул-лы-ым... - әсәһе көрмәлгән телен көскә тылдата.

- Әсәй... һөйләшмә... көсөңдө һаҡла. Һин һауыҡ инде, һауыҡ.

- Иҫә-ән-һең... Ни-мә булды, ба-алам?..

- Минә бер нәмә лә булманы, әсәй, бында - янында булырмын.

- Һин бит яҙҙың... ба-ал-аа... - аҡтыҡ көсө бөттө әсәнең. Ирендәре тартышты, күҙ ҡараһы өҫкә тәгәрәне. Айрат һикереп тороп, палата ишеген төртөп асты:

- Врач! Ҡайҙа врач! Тиҙерәк ярҙам итегеҙ!

Күрше бүлмәнән йүгерешеп сыҡҡан аҡ халатлылар юлда торған егетте этә-төртә эскә йомолдолар ҙа, боролоп инәм тигәнсе, танауы төбөндә шап иттереп ишекте ябып та ҡуйҙылар. Айратҡа коридор ултырғысына һеңеп, әлеге ишеккә күҙ йоммаҫтан тексәйеп ултырыуҙан башҡа сара ҡалманы.

Күпмелер ваҡыттан һуң врачмы, медсестрамы сыҡты. Айрат һикереп торҙо, һөҙөргә йыйынған үгеҙ ҡиәфәтендә текәлеп, тегенең ни әйтерен көттө.

- Борсолмағыҙ, инде иҫенә килгәс, артыҡ ҡурҡыныслы булмаҫ. Әлегә янына ярамаҫ, йоҡлаһын, хәл йыйһын... - ҡатындың битлек аҫтынан өҙөк-йортоҡ ишетелгән хәбәре егетҡә ҡош һайрауындай булып тойолдо. Унан тегеһе китә башлаған еренән туҡталып, халат кеҫәһенән телефон менән ҡағыҙ киҫәге сығарып һондо: - Бына, ауырыуҙың ҡулында булған.

Ҡағыҙ, тигәне, квитанция ине. Ҡайҙалыр аҡса ебәреүе тураһындағы документ. Утыҙ мең! Тукта, ҡайҙа ебәргән һуң шул тиклемде? Ниндәйҙер исемһеҙ ят номерға. Кемдең номерына улай аҡса күсерергә мөмкин әсәһе. Кем белә, бәлки, уға билдәле булмаған берәй туғаныналыр? Улай тиһәң....

Айрат әсәһенең кнопкаларындағы һандары ла юйылып бөтөп барған ябай ғына аҡ-ҡара телефонын яндырҙы ла әлеге номерҙы эҙләй башланы. Әһә, бына ошо номерҙан смс килгән. Тә-әк, нимә яҙ-ылғ-ға-а... Уҡығандарынан шаңҡыны ул. Оҙаҡ, бик оҙаҡ тамағына тығылған төйөрҙө лә йота алмайынса ҡатып торҙо. Экрандағы яҡтырып пәйҙә булған: "Әсәй, ауыр хәлгә эләктем. Тиҙ генә ошо номерға аҡса ебәр", - тигән дәшһәтле яҙыу яйлап ҡараңғылыҡҡа сумды. Ҡулындағы телефон, зарядка талап итеп, ярҙам һорағандай, эсе тауыш менән бер ҡыҫҡырҙы ла һүнде. Был ғазаплы ауаз ҡайҙалыр ошондай уҡ хәбәр алған әсәнең, йөрәгенә көтмәгәндә ҡанһыҙ уҡ килеп ҡаҙалған аҡҡош ише, асырғанып инрәүе булды шикелле. Һәр хәлдә, Айратҡа шулай тойолдо...

СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ

# ШАҒИРҘЫ ЗАМАН ТЫУҘЫРА,

## ә халҡы күтәреп кенә ала...

**? Ни өсөн бөгөн әҙәбиәтебеҙҙә бабичтар, назаровтар, рәмиҙәр тауышы юҡ?**



**Илдус БҮЛӘКОВ, педагогика фәндәре докторы, профессор, Сибай ҡалаһы:** Бөгөн назаровтар, бабичтар, ғариповтар юҡлыҡҡа борсолорға ярамай. Ни өсөнмө? Аңлатып үтәйек. Һәр кешегә Бабичҡа, Назаровҡа, Ғариповҡа бирелгән талант эләкмәй. Талант тыумыштан бирелә. "Булыр бала - биләүҙән", тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр бит. Тәжрибәһеҙлек, тар ҡарашлылыҡ, белем кимәленең түбән булыуы, шулай уҡ кешенең психологик, хатта физиологик үҙенсәлектәре - был күренештәр барыһы ла һорауҙа аталған шағирҙар кимәлендә ижад итеүгә ҡамасаулауы бар.

Мөмкинлектәр, әлбиттә, бөтәһенә лә бер тигеҙ бирелгән, әммә, уратып алған мөхит ярҙам итмәһә, һәләт үҙенән-үҙе генә асыла алмай. Кешене шиғыр яҙырға өйрәтеп буламы икән? Ғөмүмән, яҙыусыларға "шулай яҙ, былай яҙ", тип өйрәтеп булмай ул. Шағирҙар ҙа (был осраҡта ысын шағир хаҡында һүҙ бара) яһалма рәүештә шағир булып китмәгән. Кешенең ынтылышынан, һәләтенән, ынғай ассоциацияларҙың тигеҙ бирелеүенән, йә бирелмәүенән килә ул шағир булыу-булмау. Күптән түгел "Ағиҙел" журналында Фәнил Күзбәковтың, Ноғман Мусиндың һәм Наил Ғәйетбаевтың әңгәмәһе баҫылғайны. Улар ҙа ошо темаға үҙ фекерҙәре менән уртаҡлашҡан, дөрөҫ һүҙҙәр әйтелгән. Яҙыу теорияһын, тышҡы формаһын ғына өйрәтеп була. Ә эске кисерештәрҙе тормошҡа ашырыу алымдары шәхестең үҙенән килә. Был осталыҡҡа бер кемде лә бер нисек тә өйрәтеп булмай. Уй-кисерештәрһеҙ кешегә был тормошто дөрөҫ аңлауы, йәмғиәт һәм башҡа өлкәләрҙең үҫешен дөрөҫ күҙаллау - еңел мәсьәлә түгел.

Шулай ҙа, Рәми, Бабичтар һымаҡ рухта яҙыусылар, уларға ауаздаш ижад өлгөләре бармы, тигән һорауға шулай тип яуап бирер инем. Башҡорт яҙыусылары араһынан прозала бөгөн уҡырға мөмкин булған һәм ул яҙғандарҙы һәр кемгә уҡырға кәрәк булған автор, минеңсә, Әмир Әминев. Ул - өмөтлө яҙыусы. Уйлап, күңелгә үтеп инеп, ҡабул итерлек кимәлдә яҙа. Ололарҙан - Талха Ғиниәтуллин. Йәш һәм оло быуын араһында тороусы Ноғман Мусинды ла күренекле, уҡымлы яҙыусылар рәтенә индерер инем. Минең шәхси ҡабулиәтемдә лә, әҙәби процессы ҡарап барғанда ла, уларҙың әҫәрҙәре һәр кемгә оҡшай, оҡшау ғына ла түгел, улар уҡыусыһына илһамландырып, рухландырып яҙа белә. Ана шул үҙенсәлектәре - иң мөһимдәре, һәм хәҙерге әҙәбиәттә иң төплө яҙыусылар - шулар, тип әйтер инем. Ә төплө фекерле, лирика менән публицистиканы бергә ҡушып яҙған шағирҙарҙан Мостай Кәрим урынына фекер тослоғо, образдар күркәмлегә яғынан фәҡәт Рауил Бикбаев ҡына ҡалып киләләр, тип һанайым. Ләкин ул да әле Мостай Кәрим кимәленә етә алмай. Шулай ҙа, Мостайҙан ҡала иң күренекле шағир әлегә - ул. Драматургияла ла күпселектә фекер тәрәнлеге яғынан һайыраҡ йөҙгән авторҙар ғына ижад итә һымаҡ. Флорид Бүләков, әлбиттә, драматургия өлкәһендә иң күренекле, ныҡлы урынды алып тора. Нәжип Асанбаев та тормош тәжрибәһе бай булыуы арҡаһында төплө фекерле пьесалар ижад итә. Минең ҡараш шулай.

Бабичтар, назаровтар һәм ғариповтар бөгөнгө көндә яҙыусы өҫтәле артында ултырмай - улар был эштән ситтә йөрөй. Ә йәш яҙыусылар араһында ундай фекер юғарылығынан тороп һүҙ әйтә алырлыҡтар юҡ, сөнки көслө һәм дөрөҫлөктө сағылдырған тауыш өсөн иң тәүҙә донъяға ҡараш формалашып етеү, шулай уҡ тойғолар тәрәнлеге талап ителә.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ, ғилми хеҙмәткәр, философия фәндәре кандидаты:** Әҙәм балаһы тәмле ашап, матур кейенеп, унайлы йәшәргә хыяллана. Бөгөн үҙенең шундай мәнфәғәтен генә ҡайғыртыусылар күп яҙыусылар араһында. Шағир үҙ халҡының мәнфәғәтенән сығып яҙырға тейеш. Әгәр ҙә шағир үҙ халҡының мәнфәғәтен ҡайғыртып, әҙәби әҫәр яҙһа, кемгә кәрәк, шул күрәсәк һәм баһалаясаҡ ул барыбер, ә ҡалғандар күрмәмешкә һалышасаҡ, әлбиттә. Ә үрҙә ултырғандарҙы маҡтап яҙһа, табаҡтан "аш" эләгә... Ундайҙар элек тә күп булған. Башҡорт халыҡ ауыҙ-тел ижадында ундай сәсәндәр етерлек: власты, түрәләрҙе маҡтап йыр сығарғандар. Был типтағы "һарай сәсәндәре", ҡағиҙә булараҡ, үҙ заманы өсөн матур йәшәй. Уларҙың аҡсаһы ла, фатиры ла була, ләкин ундайҙар иркеле йәшәй ҙә, ижад итә лә алмай. Ундай кешеләр, матди яҡтан тәьмин ителгән булыуҙарын ғына ҡайғыртып, хаҡ түләгән кешегә генә (беҙҙең осраҡта - власҡа) хеҙмәт итә. Ундай шағир -ысын шағир түгел, минеңсә. Рәми, Назаров, Бабич кеүектәр - улар власть өсөн унайһыҙ булған һәм шулай ҡаласаҡ та. Сөнки ундайҙар ни күрә, шуны әйтеп бара. Шағир - ул үҙ халҡының тауышы. Жириновскийҙың трибунанан нисегерәк һөйләүен барыбыҙ ҙа күргәне бар. Уны ни өсөн трибунала тоталар? Сөнки ул кемдәрҙеңдер тын алышын сағылдыра, фекерен әйтеп бирә. Жириновский ауыҙынан сыҡҡан ҡайһы бер әрһеҙ һүҙҙәрҙе, теләһәләр ҙә, шовинист булып күренмәҫ өсөн, башҡалар әйтә һалып бармай. Ә баяғы кеше, оят тигән нәмәне белмәгәс, рәхәтләнеп ҡысҡыра. Беҙҙең башҡорт шағирҙары ла үҙ халҡының тауышын, уй-фекерен, яҙмышын сағылдырырға тейеш. Әлегә ундайҙарҙы мин бик күрмәйем. Мәҫәлән, Рәйес Түләк, Рәмил Дәүләткол асыҡтан-асыҡ, ҡурҡмайынса уй-фекерен, халыҡ фекерен яҙа ине, әммә, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, хәҙер икеһе лә мәрхүм.

Рәми Ғарипов үҙенең бер генә "Туған тел" шиғыры менән дә тарихта ҡалыр ине. Сөнки ул "Бер телдән дә телем кәм түгел" тигән ҡиммәтле һүҙҙәрҙе әйткән. Әлбиттә, ул да, үҙ замандаштары кеүек үк, совет идеологияһынан азат булмаған, әммә ул үҙ халҡын яратҡан, уның хәлен, тарихын эстән белгән, халыҡ яҙмышы өсөн һыҙланыуҙарын шиғырҙарында сағылдырған. Ә шағир һыҙланырға тейеш. Әгәр ҙә һыҙланмаһа, ижад кешеһе булмай ул. Ошондай шағирҙар ысынлап та юҡ һымаҡ бөгөн. Әммә берәй заман килер Ғарипов кеүектәр...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, яҙыусы, журналист:** Дөйөм алғанда, Шәйехзада Бабич, Рәми Ғарипов һәм Рәшит Назаров исемле шағирҙарҙың өсөһөнөң дә мәшһүр шағир булараҡ формалашыуының сәбәптәре бар. Шул сәбәптәрҙең иң тәүгеһе - тарихи ситуация. Һәр шағирға ҡыҫҡаса туҡталайыҡ. Бабич мәҙрәсәлә уҡыған сағында сатирик шиғырҙар ғына яҙып, әйләнә-тирәләгеләргә мандолинала уйнап, йырҙарын йырлап, таҡмаҡ әйтеп йөрөгән йәш егет кенә сағында уның башҡорт рухы, нисектер, үҙен һиҙҙермәгән. Илдә граждандар һуғышы башланып киткәс, башҡорт милли хәрәкәте Башҡортостан автономияһы өсөн көрәшкә күтәрелгәс, егеттә гражданлыҡ хисе, башҡортлоҡ рухы уяна. Уның шағир булып формалашып етеүенә ситуация ла, шулай уҡ мөхит тә йоғонто яһай. Граждандар һуғышы булмаған хәлдә, Шәйехзада Бабич исемле шағирҙы беҙ, бәлки, белмәгән дә булыр инек. Тап ошо ҡырҡыулыҡ, шул замандың трагик көсөргәнеше шағир формалашыуға булышлыҡ иткән. Рәми Ғарипов та башҡорт халҡына ҡурҡыныс янаған саҡта - атап әйткәндә, барлыҡ уҡытыуҙар урыҫ теленә күсерелеп, компартия башҡорт телен бөтөрөүгә йүнәлтелгән сәйәсәт алып барған ваҡытта шағир булараҡ трибунаға күтәрелгән. Уны ла ситуация алға әйҙәгән, ижади шәхесен формалаштырған. Рәшит Назаровтың ғына формалашыуының алдағы ике шағир барлыҡҡа килеү менән сағыштырғанда үҙ үҙенсәлектәре бар. Был шағирҙа эске тетрәнеүҙәр, эске трагизм, эске әҙләнеүҙәр шиғыр булып тышҡа бәреп сыҡҡан. Рәшит Назаровтың тыныс ваҡытта ошондай тетрәндергес шиғырҙар ижад итеүенең сәбәбе - шул. Ғөмүмән, минең уйымса, Бабичтар, Рәмиҙәр, Назаровтар барлыҡҡа килмәүҙә хәҙерге шағирҙарҙы субъектив рәүештә тәнҡитләргә ярамай, әммә, ундай яҙыусылар барлыҡҡа килһен өсөн объектив сәбәптәр булыуы шарттыр. Бөгөнгө һорау - урынлы, шулай ҙа, яңы бабичтар тыуған осраҡта ла, ул йәшәгән ҡанлы дәүерҙә йәшәргә яҙмаһын. Шағирҙы заман тыуҙыра, ә халҡы күтәреп кенә ала.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

**✓ *Йылан бәхетле булыр, сөнки был тап уның йылы бит. Иң мөһиме - логикаға түгел, ә һиҙемләүеңә ышан: интуиция хаталарҙан аралар, ә интеллект менән һеҙҙең проблемаларығыҙ юҡ.***

*ИНТЕРНЕТТАН*



# ОҘОН ҒҮМЕР...

## һаулыҡ эҙемтәһе

■ Америка Йоҡо медицинаһы академияһы хеҙмәткәрҙәре белдереүенсә, көндөҙ бер туҡтауһыҙ йоҡоға тартып тора икән, был организмда D витамины етешмәүенең бер билдәһе булыуы ихтимал. Сомнологта иҫәпә тороусы пациенттарҙы тикшереп ҡарағандан һуң уларҙың барыһына ла тап ошо витамин етешмәүе асыҡланған. Әлегә был тулыһынса өйрәнелеп бөтмәгән өлкә, шуға табиптар әле тикшеренеүҙәрҙе дауам итә. Шул уҡ ваҡытта, көн һайын йоҡоһо туйып уяныусы кешеләрҙә табыуы һирәк, ти белгестәр. Болотло көн, тынсыу эш бүлмәһе лә йоҡоно килтерә. Сөнки был осраҡтарҙа атмосфера баҫымы түбәнәйә һәм баш мейеһе кислород менән насар тәьмин ителә. Төшкө аштан һуң да был күҙәтелеүе ихтимал, сөнки ҡан ашты эшкәртеү өсөн ашҡаҙанға тулыша, һөҙөмтәлә мейе тағы ла энергияһыҙ ҡала. Был осраҡтарҙа саф һауаға сығырға, хәрәкәт итергә кәрәк.

■ 2010 йылда төрлө илдәрҙә үткәрелгән халыҡ-ара сәләмәтлек рейтингы һөҙөмтәләре иғлан ителгән. Был исемлектә илдәр граждандарҙың йәшәү сифаты һәм йәшәү оҙайлығы буйынса билдәләнгән. "МедВести" яҙыуынса, был ике күрһәткес буйынса Япония иң беренсе тора. Икенсе урында - Сингапур, өсөнсө урында - Швейцария килә. Дүртенсе һәм бишенсе урындарҙа - Испания менән Италия. Исемлектең алтынсы урынында Австралия, унан һуң Канада, Андорра, Израиль һәм Көньяҡ Корея килә. Рәсәй был рейтингта 97-се урында тора.

■ Әгәр ҙә бала насар уҡый икән, проблема балала түгел, ә уның әйләнә-тирәһендә булыуы ихтимал, ти Англияның Мәғариф тикшеренеүҙәре милли фонды эксперттары. Мәҫәлән, кеҫә телефондары йәки телевизорҙары булған балалар тиҫтерҙәренә ҡарағанда насарыраҡ уҡый. MedikForum яҙыуынса, тикшеренеүҙәр барышында белгестәр дүрт мең баланы тикшергән. Бүлмәләрендә телевизор, DVD-плеер булһа, етмәһә бала кеҫә телефоны менән әүҙем ҡулланһа, уларҙың уҡыу тиҙлеге бөтөнләй насар булып сыҡҡан. Ә бына музыка ҡоралдарында уйнау балаға, киреһенсә, яҡшы тәьҫир итә икән. Ғалимдар тағы бер үҙенсәлекте асыҡлаған: социаль селтәрҙәрҙә йышыраҡ ултырған бала физика, химия, математиканы ла насарыраҡ үҙләштерә.

■ Коннектикут университетында үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, организмға саҡ ҡына һыу етешмәй башлаһа, шунда уҡ кәйеф насарая, көсһөҙлөк барлыҡҡа килә, фекерләү ҡеүәһе түбәнәйә. Тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе профессор Лоренс Е. Армстронг фекеренсә, ял иткәндә лә, компьютер алдында ултырғанда ла һыу эсергә кәрәк. "Һыуһау тойғоһо беҙ 1-2 процент шыйыҡлыҡты юғалтҡас ҡына барлыҡҡа килә. Әммә был ваҡытҡа организмда һыуһыҙлыҡ һөҙөмтәһендә кире эҙемтәләр башланған була", - ти профессор. Былдай хәл килеп тыумаһын өсөн көнөнә 2 литр һыу эсергә кәрәк. Балалар өсөн был норманың дүрттән бер өлөшө йәки яртыһы ла етә. Был исемлеккә ҡайнар эсемлектәрҙе лә индерергә ярай, тик уларҙың составында кофеин булмаһын. Мәҫәлән, лимон ҡушылған бәтнәк, имбирь, аҡ сәскә сәйҙәре бигерәк файҙалы.

*ЙОНДОҘНАМӘ*

# ЙЫЛАНҒА ЯРАП БУЛЫРМЫ?



**Төп символы Һыу стихияһы булған 2013 йыл үҙ хужаһы Йыландың холҡона тотороҡлолоҡ өҫтәмәй, үкенескә ҡаршы. Тигеҙ генә аҡҡан һыу өҫтө күҙ асып йомған арала ярһыу ташҡынға әүерелгән кеүек, Йылан йылы ла уйламағанда өйөрмәгә әйләнеүе ихтимал. Ваҡиғалар ағышы иҫ киткес тиҙлектә үҫешә барып, ҡапыл ғына тынып ҡалыуы бер ҙә ғәжәп күренеш булмаясаҡ. 2013 йылдағы тормош кемдәргәләр ауыҙ тултырып тоҙло һыу ҙа уртлатасаҡ әле. Стихия менән алышҡа әҙер булыу кәрәк: кем бөтә һынауҙарҙы ла үтеп сыға ала, улар тигеҙ юлдан тыныс аҙымдарын һаһр. Ә бына мөсәл йылындағы һәр бер билдәгә йыл ниҙәр вәғәҙә итә?**

**Сыҫҡандарға** үтә ныҡ әүҙемлектән бер аҙ ял итеп алыу ҡамасауламаҫ, юғиһә, улар ығы-зығыға бирелеп, үтә ныҡ хәрәкәтсәндәр, ә был уларға киләһе йылдың төп стратегияһы - күҙәтеү, көтөү кеүек сифаттар килтерергә тейешле һөҙөмтәне бирмәйәсәк. Элек, ғәҙәттә, унышҡа өлгәшә торған өлкәләрҙәге эштәрегеҙ ҙә алға бармаясаҡ. Был һеҙҙең эшмәкәрлектә генә түгел, шәхес-ара мөнәсәбәттәрегеҙҙә лә сағылыш табасаҡ. Ауыр осраҡтарҙа ғаиләгеҙ мәнфәғәттәренә лә зыян килеүе ихтимал. Хәлегеҙҙе баҫалҡылыҡ һәм сабырлыҡ, яҡындарығыҙ хаҡына шәхси уңайлыҡтарығыҙҙы фиҙа ҡылыу ғына ҡотҡарыр, һис булмаһа. Ә инде файҙа һәм ләззәттәр артынан ҡыуыуҙы яҡшыраҡ ваҡытҡа ҡалдырып торһағыҙ ҙа була.

Яңы йылда **Һыйырҙарҙың** ғаилә тормошонда бөтәһе лә шыма ғына бармаҫ кеүек тойола. Шул сәбәпле никахҡа инеү ғәмәлен ошо йылға ниәт итеп торғандарға был эште киләһе йылға кисектереү фарыҙ. Ғөмүмән, һеҙгә был йыл еңелдән булмаҫтыр, ахырыһы: сәләмәтлек яғынан проблемалар күренә; көс ҡулланыу ҡорбаны булыуҙан һаҡланығыҙ. Бер ниндәй авантюраға бирелмәгеҙ, еңел аҡыллылыҡҡа юл ҡуймағыҙ! Һыйырҙар үҙҙәренең эшлеклелек абруйын һаҡларға тырышыр, хеҙмәттәштәре менән мөнәсәбәттәрендә иплелек күрһәтер, юғиһә, был юҫыҡта ебәрелгән хаталар эҙемтәләрен юйыуы ҡыйынға тура киләсәк. Тормошта ла, мөхәббәтендә лә һыйырҙар - практиктар, улар һауала болоттарға төрөнөп осоп йөрөмәй, үҙ һүҙҙәрен һүҙ итеү өсөн ныҡышмаллыҡ күрһәтәләр. Алдарына маҡсат ҡуялар икән, уға өлгәшеү өсөн теләһә ниндәй көрәштәрҙә лә емерергә әҙерҙәр. Шулай ҙа Йылан йылында уларға тап бына ошо сифаттарын йүгәнләп торорға кәрәк буласаҡ та инде. Фәҡәт шул саҡта ғына улар яҡындары менән мөнәсәбәттәрен һаҡлап алып ҡаласаҡ.

**Юлбарыҫтар** өсөн йыл яҡшы килер. Һеҙ ниндәйҙер эштәр һәм саралар ойоштороуҙа рухландырыусы ролендә күренәһегеҙ. Кешеләрҙе яңы берәй проект (бәлки- авантюра?) ойоштороу башҡаларға ҡарағанда һеҙгә еңел биреләсәк. Алыштарҙа уның ҡеүәтен һәм ҡыйыулығын ихтирам итеүсе Йылан Юлбарыҫҡа ҡамасаулыҡ килтермәйәсәк. Унан һуң, 2013 йылда Юлбарыҫ ҙур коллектив менән уңышлы етәкселек итеп кенә ҡалмаясаҡ, ә тарих ағышына (үҙе эшләгән фирманыҡына булһа ла ) йоғонто яһаясаҡ. Көслө һәм изге күңелле Юлбарыҫ тәбиғәте менән рыцарь, шуға ла уға бөтөн ҡеүәтен ижад эшенә йүнәлтеү тәбиғи ҡабул ителер. Уның хис-тойғоло хәрәкәтсәнлеге күңелендә оҙаҡ йөрөтөп нигеҙләнгән философик ҡараштарға таянған сүрәттә генә уңыш килтерер.

**Ҡуяндар** өсөн дә һәйбәт йыл килә. Йыландың фәлсәфәгә бирелеү ғәҙәте ҡуянға ла ҡүсер, ә был иһә уға күңел тыныслығы, эске гармония алып килер. Тыныс холоҡло, яҡшы күңелле һәм әҙәпле Ҡуян донъя камиллығына интыып ҡына ҡалмай, уның серен дә белә:"Тормошто яҡшыға үҙгәртәм, тиһәң, үҙеңдән башла". Был дөрөҫ, ләкин шулай ҙа һиҙгерлек ҡамасауламаҫ, сөнки һеҙҙең мәрхәмәтлелек менән яман уйҙа файҙаланыусылар булыр. Йылдың тәүге яртыһында әүҙемлек күрһәтегеҙ: яңы кешеләр менән танышығыҙ, сәйәхәт ҡылығыҙ, карьера эшләгеҙ. Йылығыҙҙың икенсе яртыһын ғаилә мәнфәғәттәренә бағышлағыҙ, Йылан быны бик тә хуплаясаҡ.

**Аждаһа** өсөн дә йыл яҡшы булмаҡсы. Йылан уның юғары осоша булыуына ҡаршы килмәҫ. Һәр ваҡыттағыса, Аждаһа - яҙмыш иркәһе, уға һәр тарафҡа юлдар асылып тора. Әйләнә-тирәләгеләре үҙҙәре лә абайламаҫтан уға тартылыр, бөтәһе лә уның ылыҡтырғыс йоғонтоһона бирелер, ә был иһә уға башҡалар өсөн ябыҡ ишектәрҙе лә шар асыпыр. Ләкин Аждаһа өсөн бер нәмә лә "аҙ-аҙлап ҡына" булмай. Уның өсөн бик ҡыҙыҡлы, шул уҡ ваҡытта "шартлау хәүефе" булған йыл көтөлә. Донъяға күнегелгән ҡараштан азат булыуы һәм фантазияһы уны һәр ерҙә лә иғтибар һәм ваҡиғалар уртаһына ҡуя, уны шәйләмәй ҡалыу мөмкин түгел. Был йылда Аждаһаның эшкә күмелергә иҫәбе юҡ, ул бер ниндәй хәүеф янауына ҡарамаҫтан, бөтә көсөн күңел асыуҙар эҙләүгә йүнәлтәсәк, эҙемтәләре яҡшынан булмаясаҡ ҡылыҡтары менән аптыратасаҡ. Былар бөтәһе лә уның хеҙмәт карьераһында йәки ярәткан кешеһе менән мөнәсәбәттәренә насар йоғонто яһаясаҡ. Ошоларҙы иҫтә тотоп, көсөн эшкә йүнәлтһә, сәйәси бәхәстәр һәм алыштарҙан ситтә торһа, йыл һеҙҙең өсөн үҙ йылыһын йәлләмәҫ.

**Йылан** бәхетле булыр, сөнки был тап уның йылы бит. Иң мөһиме - логикаға түгел, ә һиҙемләүеңә ышан: интуиция хаталарҙан аралар, ә интеллект менән һеҙҙең проблемаларығыҙ юҡ. Киреһенсә, Йыландың асыҡ аналитик аҡылы ярҙамында теләһә кемде һәр нәмәгә ышандырып буласаҡ. Ҡыҙыҡ өсөн 2013 йылда үҙегеҙҙең ошо һәләтегеҙҙе тикшереп ҡарағыҙ әле - һөҙөмтәһенә




| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| **ҒИНУАР - ҺЫУЫҒАЙ** | | | | | | |
| дш | шш | шр | кс | йм | шб | йш |
| | 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 |
| 7 | 8 | 9 | 10 | 11 | 12 | 13 |
| 14 | 15 | 16 | 17 | 18 | 19 | 20 |
| 21 | 22 | 23 | 24 | 25 | 26 | 27 |
| 28 | 29 | 30 | 31 | | | |
| **ФЕВРАЛЬ - ШАҠАЙ** | | | | | | |
| | | | | 1 | 2 | 3 |
| 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 |
| 11 | 12 | 13 | 14 | 15 | 16 | 17 |
| 18 | 19 | 20 | 21 | 22 | 23 | 24 |
| 25 | 26 | 27 | 28 | | | |
| **МАРТ - БУРАНАЙ** | | | | | | |
| | | | | 1 | 2 | 3 |
| 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 |
| 11 | 12 | 13 | 14 | 15 | 16 | 17 |
| 18 | 19 | 20 | 21 | 22 | 23 | 24 |
| 25 | 26 | 27 | 28 | 29 | 30 | 31 |
| **АПРЕЛЬ - АЛАҒАРАЙ** | | | | | | |
| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 |
| 8 | 9 | 10 | 11 | 12 | 13 | 14 |
| 15 | 16 | 17 | 18 | 19 | 20 | 21 |
| 22 | 23 | 24 | 25 | 26 | 27 | 28 |
| 29 | 30 | | | | | |
| **МАЙ - ҺАБАНАЙ** | | | | | | |
| | | 1 | 2 | 3 | 4 | 5 |
| 6 | 7 | 8 | 9 | 10 | 11 | 12 |
| 13 | 14 | 15 | 16 | 17 | 18 | 19 |
| 20 | 21 | 22 | 23 | 24 | 25 | 26 |
| 27 | 28 | 29 | 30 | 31 | | |
| **ИЮНЬ - ҺӨТАЙ** | | | | | | |
| | | | | | 1 | 2 |
| 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
| 10 | 11 | 12 | 13 | 14 | 15 | 16 |
| 17 | 18 | 19 | 20 | 21 | 22 | 23 |
| 24 | 25 | 26 | 27 | 28 | 29 | 30 |
| **ИЮЛЬ - МАЙАЙ** | | | | | | |
| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 |
| 8 | 9 | 10 | 11 | 12 | 13 | 14 |
| 15 | 16 | 17 | 18 | 19 | 20 | 21 |
| 22 | 23 | 24 | 25 | 26 | 27 | 28 |
| 29 | 30 | 31 | | | | |
| **АВГУСТ - УРАҒАЙ** | | | | | | |
| | | | 1 | 2 | 3 | 4 |
| 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 | 11 |
| 12 | 13 | 14 | 15 | 16 | 17 | 18 |
| 19 | 20 | 21 | 22 | 23 | 24 | 25 |
| 26 | 27 | 28 | 29 | 30 | 31 | |
| **СЕНТЯБРЬ - ҺАРЫСАЙ** | | | | | | |
| | | | | | | 1 |
| 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 |
| 9 | 10 | 11 | 12 | 13 | 14 | 15 |
| 16 | 17 | 18 | 19 | 20 | 21 | 22 |
| 23 | 24 | 25 | 26 | 27 | 28 | 29 |
| 30 | | | | | | |
| **ОКТЯБРЬ - ҠАРАСАЙ** | | | | | | |
| | 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 |
| 7 | 8 | 9 | 10 | 11 | 12 | 13 |
| 14 | 15 | 16 | 17 | 18 | 19 | 20 |
| 21 | 22 | 23 | 24 | 25 | 26 | 27 |
| 28 | 29 | 30 | 31 | | | |
| **НОЯБРЬ - ҠЫРПАҒАЙ** | | | | | | |
| | | | | 1 | 2 | 3 |
| 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 |
| 11 | 12 | 13 | 14 | 15 | 16 | 17 |
| 18 | 19 | 20 | 21 | 22 | 23 | 24 |
| 25 | 26 | 27 | 28 | 29 | 30 | |
| **ДЕКАБРЬ - АҠЪЮЛАЙ** | | | | | | |
| | | | | | | 1 |
| 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 |
| 9 | 10 | 11 | 12 | 13 | 14 | 15 |
| 16 | 17 | 18 | 19 | 20 | 21 | 22 |
| 23 | 24 | 25 | 26 | 27 | 28 | 29 |
| 30 | 31 | | | | | |
| дш | шш | шр | кс | йм | шб | йш |

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# КҮЛӘГӘҺЕ ЮҠ ЙЫЛАНДЫҢ




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

**Башҡорт дәүләт академия драма театры**

**8 ғинуар 11.00, 14.00 "Үҙ йөрәгеңде тыңла!"** (Г.Андерсен), әкиәт

**8 ғинуар "Шәүрәкәй"** (М.Буранғолов), музыкаль комедия

**9 ғинуар "Ҡатынымдың исеме Морис"** (Р.Шарт), комедия

**10 ғинуар "Нәркәс"** (И.Йомағолов), мелоромантик трагедия

**11 ғинуар "Бер мәл санаторийҙа..."** (Н.Ғәйетбай), комедия

**12 ғинуар "Ай тотолған төндә"** (М.Кәрим), трагедия

**13 ғинуар "Бәхет хаҡы"** (Х.Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама

**52-се һандағы кроссворд яуаптары: Горизонталь буйынса:** 2. Цех. 4. Ира. 5. Акция. 8. Үткелек. 10. Әҙәбиәт. 11. Ит. 12. Ат. 14. Окапи. 16. Сүкеш. 19. Себеш. 22. Рикша. 23. Буран. 24. Эт. 25. Ай. 27. Олигархия. 31. Тәртип. 33. Рөхсәт. 36. Обама. 37. Сибай. 39. Ралли. 41. Кәбән. 44. Го. 45. Ра. 47.Хисамитдинова. 48. Кеше. 50. Урам. 53. Атлама. 55. Домино. 57. Филармония. 59. Ностальгия. 62. Артыш. 63. Ҡарға. 65. Йоғонос. 66. Тараҡан. 67. Ниәт. 69. Тары. 71. Күгән. 72. Сабата. 73. "Аврора". 74. Ситән. 76. Мәһәр. 77.Аксиома.

**Вертикаль буйынса:** 1. Гейзер. 2. Цирк. 3. Хажи. 5. Азот. 6. Циферблат. 7. Ясле. 8. Үләт. 9. Кета. 11. Иләү. 13. Тиле. 14. Оле. 15. Иле. 16. Сорт. 17. Кикел. 18. Шланг. 19. Себер. 20. Барби. 21. Шына. 24. Эргә. 26. Йәйә. 28. Ипподром. 29. Алма. 30. Харакири. 31. Типи. 32. Роза. 34. Сәсә. 35. Тәкә. 37. Сүре. 38. Бәхет. 40. Литраж. 42. Браун. 43. Нужа. 44. Гармун. 46. Анчоус. 48. Коми. 49. Шама. 51. Роль. 52. Мали. 54. Лампас. 56. Ишарат. 57. Фенолог. 58. Яҡшат. 59. Ноҡот. 60. Ярғанат. 61. Инәү. 64. Арыш. 68. Әйтемсәк. 70. Аквариум. 75. Әһали.

ИҒЛАН

**ТӨБӘК ҺАУЛЫҠ ҮҘӘГЕ**

**Өфө, Баймаҡ, Дәүләкән һәм Сибай** ҡалаларында асыласаҡ филиалдарҙа медицина хеҙмәткәрҙәре, бухгалтерҙар, экономистар, юристар, дистрибьюторҙар, инженер-техник хеҙмәткәрҙәр һәм башҡаларға **эш тәҡдим итә.**

**8-960-383-98-84** телефоны буйынса мөрәжәғәт итергә.

ХОККЕЙ

# ТАҒЫ БЕР ЕҢЕҮ!

**Өфөлә үткән Йәштәр араһындағы шайбалы хоккей буйынса донъя чемпионатында көйлө уйнаусы командалар бихисап. Шундайҙарҙан Канада, Швеция һәм АҠШ-ты билдәләргә була.**

Шуға ла ошо командаларҙың уйындарын беҙҙең көйәрмәндәр ҙә ҡыҙығып күҙәтте. Германия хоккейсыларын 8:0 ҡоро иҫәбе менән тармар иткәндән һуң, АҠШ хоккейсылары иртәгәһе көндө үк майҙан хужалары менән уйнаны. Көйәрмәндәр фекеренсә, океан арьяғынан килгән был бөркөттәр Рәсәй уласындарын да тиҙ арала йолҡҡоспап ырғытыр кеүек ине. Ләкин беҙҙекеләр бөркөттәргә лә бирешмәҫ тимер уласын булып сыҡты. Әлбиттә, рәсәйлеләр был матчта ла күп кенә хаталар ебәрҙе, күпселектә тәшкил иткән ваҡыттарҙы файҙаланыу мөмкинлеген бер-нисә тапҡыр ҡулдан ысҡындырҙы. Уның ҡарауы, беҙҙең ҡапҡа һаҡсыһы Макаров үҙен уйындың яҙмышын хәл итер уйынсы булараҡ танытты. Күптәр Рәсәй командаһының еңеүендә ниндәйҙер мистика күрҙе, берәүҙәр уны осраҡлы уңыштарға япһарҙы. Шулай ҙа... Рәсәй егетәренә әллә көйәрмәндәр ярҙам иттеме, ни тиһәң дә, рухи терәк тә ҙур ғына роль уйнай. Бер һүҙ менән әйткәндә, рәсәйлеләр командаһы был осрашыуҙа шәп уйнаны.

Уйынды ҡарарға килгән көйәрмәндәрҙең һаны, ойоштороусылар билдәләүенсә, был юлы 7600 кешегә етте. Улар араһында кемдәр генә юҡ: АҠШ, Канада граждандары ла һәм, әлбиттә, Өфө халҡы һәм баш ҡала ҡунаҡтары. Башҡорт милли кейемдәре кейгән өс ир-уҙаманы - Сабирйән, Ярат һәм Рәмил исемле ағайҙар менән һөйләшеп киттек. Баймаҡ ҡалаһынан икән өсәһе лә. Донъя чемпионатын күрәйек, тип, өсәһе өс ерҙә эшләүенә ҡарамаҫтан, көн һорап, район мәҙәниәт йортонан ҡамсат бүректәр алып тороп, буран тип тормай, килеп еткәндәр. "Бындай донъя чемпионаты башҡаса әллә беҙҙә була, әллә юҡ, тип, килергә булдыҡ һәм еңеп ҡайтыуыбыҙға шатбыҙ, шуныһы айырыуса мөһим", - тип, бөгөнгө еңеүҙе үҙ иҫәбенә теркәне Сабирйән Шәрипов. Шунда күренә лә инде ысын көйәрмән рухы.

Форсатты файҙаланып, океан арьяғынан килеүсе көйәрмәндәр менән дә гәпләшеп алырға булдыҡ. Уеид Чекк исемле көйәрмән егет Канаданың Саскатун исемле ҡалаһынан килгән, ул Рәсәйҙә - беренсе тапҡыр. "Тәбиғәт тә, кешеләр ҙә, хатта, һауа торошоноң һыуыҡ булыуы ла бик оҡшаны", - тип, тәҫораттары менән бүлешергә ашыҡты ул. Кешеләрҙең ихлас, кешелекле, танышырға яратыуын айырыуса йылы хистәр менән телгә алды. Ватандарынан Башҡортостанға 10 сәғәт осҡандар. Ул Өфөләгә чемпионатҡа 200 кешелек команда менән килеүҙәре, Башҡортостан тәбиғәтенең күңеленә хуш килеүе, Урал тауҙары тураһында быға тиклем үк ишетеп белеүҙәре тураһында бәйән итте. Канада вәкилдәре бик ихлас күңелле, телгә маһир булып сыҡты, бер ир хатта балаларға үҙе менән алып килгән иҫтәлекле бүләктәрен дә өләште.

АҠШ командаһы менән осрашыу 2:1 иҫәбенә Рәсәй йыйылма командаһы файҙаһына тамамланды, чемпионат дауам итә...

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Өфө ҡала округы башлығы Ирек Ялалов Канаданың Санкт-Альберт ҡалаһы мэры Нолан Краус менән эшлекле осрашыу барышында ике ҡала араһындағы мәҙәни, спорт һәм туризм өлкәһендәге бәйләнештәр перспективаһы хаҡында һөйләште. Нолан Краус Өфө хаҡында инглиз телендәге видеопрезентация ҡарағандан һуң, республиканың баш ҡалаһы тураһындағы тәьҫораттары менән бүлеште."Мин һеҙҙең ҡалаға ҙур һоҡланыу менән ҡарайым. Тәү сиратта халыҡтың әҙәпле булыуына иғтибар иттем, - тине Канада ҡунағы. - Беҙҙең ҡаланан айырмалы рәүештә, һеҙҙәге урам һәм тротуарҙарҙың киңлеге күҙгә ташланды. Беҙҙә, ҡыҙғаныҫҡа күрә, улар күпкә тар". Ул шулай уҡ ҡунаҡханаларҙы хеҙмәтләндереүҙең юғары кимәлдә булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды һәм "Өфө-Арена" спорт комплексы менән һоҡланыуын йәшермәне.**

Илгизәр БУЛАТОВ.

АТЫҢ КЕМ?

# СУРА БАТЫР ЕЙӘНДӘРЕ



**Һеҙ һүрәттә күргән был ике егет - Сура батыр ейәндәре. Беҙ был балаларҙы Әбйәлил районында Сура батырға һәйкәл ҡуйыу тантанаһында осраттайныҡ.**

Әбйәлил районы Ҡаҙмаш ауылынан Айсаф менән Нурислам Яҡуповтар була улар. Ҡарағыҙ әле, ниндәй матур исем ҡушҡан уға атаәсәһе. Аталары Азат Яҡупов Ҡаҙмаш урта мәктәбендә физик культура дәрестәрен алып бара. БДУ-ның Сибай институтын тамамлағас, ауылға ҡайтып, шунда донъя көтөргә, йорт һалып, халҡыбыҙға файҙалы эштәр эшләр балалар үҫтереүҙе маҡсат итеп ҡуя егет. Әле бына шул маҡсатын тормошҡа ашырып йөрөгән сағы. Балаларында - ике улында - саф күңеллелек, ихласлыҡ сифаттарын күрергә теләп, исемдәрҙе лә матурҙан - мәғәнәлененән һайлап ҡушҡан. Айсаф - саф айҙы аңлата. Йәғни, мосолмандар өсөн саф, изге айҙа тыуған был бала. Нурислам - Ислам нуры, ул киләсәктә ихлас күңелле инсан булып йәшәр, тигән өмөттә. Нурға, сафлыҡҡа бәйле исемдәрҙе ҡушып, Вәзирә һәм Азат Яҡуповтар улдарын Сура батыр рухында тәрбиәләй. Был ике малай ҙа аталарынан ҡалышмаҫҡа тырышып, йәйен туп тибә, ҡыш етһә, саңғыла йөрөй. "Егет кеше беҙҙең кеүек булырға тейеш", - ти улар.

# ИРКӘ ҠЫҘ - НАҘГӨЛ,

## батыр малай - Алсынбай



**Һүрәттәге гәлсәрҙәй нәфис, иркә ҡыҙға атаәсәһе яратып Наҙгөл исемен ҡушҡан, ә йәш ғаиләлә малай тыуғас, уның ыласындай йылғыр, батыр, бай булыуын теләп, Алсынбай тигән исемде һайлайҙар.**

Өфөнөң Калинин районы Шаҡша микрорайонында йәшәүсе Наҙгөл һәм Алсынбайҙың иң яраткан хайуаны - ат. Наҙгөл быйыл да Ҡыш бабайҙан Яңы йыл бүләге итеп ат һораған. "Былай ҙа өй тулы уйынсыҡтарҙың күбеһе ат ине, хәҙер "өйөрөбөҙ" тағы ла арта инде", - тип көлә Илсиә Ғарифуллина. Ауылға ҡунаҡҡа ҡайтҡанда ла Наҙгөл менән Алсынбайҙы ат янынан алып китермен, тимә.

Бәләкәстәрҙең һөнәрҙәре лә күп. Улар һүрәт төшөрөргә, йырларға һәм бейергә бик әүәҫ. Наҙгөл хатта ата-әсәһенә үҙе әкиәттәр һөйләй. Ул шулай уҡ гипстан эшләнгән әйберҙәрҙе төҫлә буяуҙарға буяу менән дә мауыға. Бына шундай унған һәм матур балалар үҫеп килә Ғарифуллиндар ғаиләһендә.

**Наҙгөл СӘЙФУЛЛИНА.**

ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН!

## ЭСӘК-ҠАРЫНЛЫ БӘЛЕШ

**Ҡамыр** өсөн 500 грамм он, 3/4 стакан һөт, 2 ҡалаҡ һары май, 1 йомортҡа, 0,5 ҡалаҡ аҡ май алына.

**Бәлеш эслеге** өсөн 700 грамм эсәк, 700 грамм картуф йәки 300 грамм ярма, 100 грамм һуған, 1 аш ҡалағы тоҙ, борос, лавр япрағы кәрәк буласаҡ.

Һәйбәтләп таҙартылған һәм йыуылған һыйыр йәки ат эсәктәрен, ҡартаһын һыуын алмаштыра-алмаштыра 8-12 сәғәт еберергә. Һуңынан эҫе һыу менән бешереп, эсәктәрҙе лайланан таҙартырға һәм бер-нисә тапҡыр сайҡатырға. Әҙерләнгән эсәктәрҙе 1-1,5 сантиметр киңлегендә турарға. Йомшаҡ итеп ҡамыр баҫырға. Эсәктәрҙе туралған һуған, бәрәңге йәки алдан бер аҙ бешерелгән ярма, тоҙ, борос ҡушырға. Ҡамырҙы икегә бүлергә. Бәлештең аҫтына иҫәпләнгән ҙурыраҡ бүлемдә 5-7 мм ҡалынлығында йәйергә һәм майланған табаға һалырға. Ҡамыр өҫтөнә әҙер фаршты йәйеп һалып, өҫтөн ҡамыр менән ҡапларға һәм аҫтағы ҡамыр менән берләштереп, ситтәрен йәбештереп үрергә. Бәлештең өҫтөндәге ҡамыр уртаһын, бешкәндә эсендәге быу сыҡһын өсөн, тишергә. Бәлеште 200 градуста духовкала йәки мейестә 30-40 минут бешерергә.

## БЫҠТЫРЫЛҒАН ИТ

Итте һөйәгенән айырып алырға һәм артыҡ эре итмәйенсә турарға. Кәрәгенсә тоҙ, борос, лавр япрағы һалырға. Ярты йәки бер литрлыҡ банкаларҙы таҙа итеп йыуырға һәм 10 минут быуҙа тотоп алырға. Әҙерләнгән итте банкаларға бүлеп һалырға һәм уларҙы ҡапҡастар менән үтә ныҡ ныҒытмайынса ғына ҡапларға. Кәстрүлгә һалҡын һыу һалырға һәм шунда банкаларҙы теҙеп ултыртып (тик һыу банкаларҙың өҫтөнә сыҡмаһын), утҡа ҡуйырға. Банкалағы иткә һыу һалырға ярамай, ул кәстрүлдәге һыу ҡайнау арҡаһында быҒып (томаланып) бешә. Ҡарт йәки йәш мал булыуына ҡарап, уны оҙаҡ йә тиҙ бешерәләр. Бешеп сыҡҡас, банкаларҙы үҙ һыуында көйө йылы хәлгә килгәнсе һыуытығыҙ ҙа, ҡапҡастарын ныҡлап ябығыҙ. Банкаларҙы һалҡын ерҙә һаҡларға кәрәк.

## БЕШКӘН ТЕЛ

100 грамм һыйыр, һарыҡ һ.б. һуйылған малдың телен һәйбәтләп йылы һыуҙа йыуып, яй ғына утта, янына теленгән кишер, һуған, лавр япрағы һалып, бешерергә. Бешкән телде, өҫкө ҡатламы тиҙерәк ҡупһын өсөн, һалҡын һыуға һалып торорға кәрәк. Һыуынған телдең төбөнән осона табан өҫкө ҡатын һыҙырып алырға ла, ҡайнап торған тоҙло һыуҙа тағы ла бер аҙ ҡайнатырға. Телде йоҡа ғына телемдәргә турап, тәрилкәгә һалып, эҫе йәки һыуытылған килеш табынға бирергә. Янына бешкән картуф, кишер ҡуйырға мөмкин.

## БАУЫР ҠОЙМАҒЫ

Әҙерләү өсөн 0,5 килограмм һыйыр бауыры, 2 йомортҡа, 5 баш һуған, 3 бәрәңге, 200 грамм һөт, 0,5 балғалаҡ аш содаһы һәм тәмәнә ҡарап тоҙ, борос алына. Барыһын да ит турағыс аша үткәреп, тоҙ, борос ҡушып болғатырға. Килеп сыҡҡан фаршҡа һөт ҡойорға һәм ҡоймаҡ бешерергә.

## ҠАПҠЫЛАП АЛЫУ ӨСӨН ЕҢЕЛ АШАМЛЫҠ

200-әр грамм бешерелгән һыйыр итен һәм бауырҙы нәҙек кенә өлөштәргә бүлеп, аралаштырып, тәрилкәгә һалырға. Өҫтәлгә яңы ғына бешкән һәм йәшел тәмләткестәр һалынған бәрәңге менән бирергә.

## "БАШҠОРТОСТАН" САЛАТЫ

40 грамм бешерелгән һыйыр итен, 40 грамм бауырҙы, 2 йомортҡаны, 2-4 бәрәңгене, 40 грамм тоҙланған ҡыярҙы, 15-20 грамм йәшел боросто, бер алманы майонез һәм ҡаймаҡ ҡатнашмаһы менән бергә ҡушып болғарға. Тәменә ҡарап тоҙ, борос һалырға, өҫтөн йәшел тәмләткестәр менән биҙәргә.

**Гөлназ САФИУЛЛИНА әҙерләне.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БАҘ ҠАҘЫҺАҢ...

## икене ҡаҙы

Йыртанас кеше йырсы булған, ашамһаҡ кеше ашнаҡсы булған.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Матур ҡатын-ҡыҙ - күҙгә, изгелекле ҡатын-ҡыҙ йөрәккә оҡшай. Береһе уның бынамын тигән матур әйбер, ә икенсеһе - ысын хазина.

**(Наполеон Бонапарт).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ҡатын күршеһенә зарын һөйләй: йәнһе лә, уны әхирәте бик нык рәнйеткән. Күршеһе уны тыныслandыра, әхирәтен ғәфү итергә кәңәш бирә.**

**-Кисерергә? Был мөмкин түгел! Яуызлыҡты кисерергә ярамай! - тип ярһый ҡатын.- Ғөмүмән, мине яратмаған кешеләрҙе ни өсөн мин яратырға тейеш? Тирә-яғымда барыһы ла алдағанда, хыянат иткәндә һәм яуызлыҡ ҡылғанда ниңә мин генә изгелек эшләргә тейешмен һуң әле?**

**-Улайһа, мин һиңә бер тарих һөйләйем, - ти уға күршеһе. - Бер кеше йәшәгән. Ул Тәбиғәтәсәгә мөрәжәғәт итеп, шундай теләген еткергән: "Зинһар, майшәм яндырмаҫ өсөн төндәрҙе яҡты ит, мейескә яҡмаҫ өсөн ҡыштарҙы йылы ит". Ләкин Тәбиғәт-әсә был кешенең үтенесенә иғтибар итмәй, сөнки уның был теләктәре үтәлерлек булмай. Кеше Тәбиғәт-әсәгә асыулана һәм шундай ҡарарға килә: "Һин шулаймы ни әле? Былай булғас, мин майшәм тоҡандырмайым һәм һинең өсөн төндө яҡтыртмайым. Йылыны менән һине йылытмаҫ өсөн мейескә лә яҡмайым. Мин хатта һиңә бөтөнләй йылы ҡалмаһын өсөн өйҙөң ишеген асып ҡуясаҡмын..."**

**- Ҡалай алйот булған был кеше... - тип бүлдергән күршеһен ҡатын. - Өйөндәге майшәм менән бөтөн донъяны яҡтыртам, мейесе йылыһы менән урамды йылытам тип уйланымы икән? Был яҡты һәм йылылыҡ бит иң тәүҙә уның үҙенә кәрәк. Тәбиғәт-әсә үҙе тураһында үҙе хәстәрләй ул!**

**-Улай уйлағас, ниңә һуң һин ошо ҡатындың ҡылыҡтарын ҡабатлайһың?-ти күрше ҡатын.**

**-Минме? - тип аптырап һорай ҡатын.**

**- Әлбиттә, һин! Ни өсөн һин әйләнә-тирәндә ҡараңғылыҡ ҡуйырғанда үҙеңдең мөхәббәт утыңды һүндерәһең, ниңә һин әйләнә-тирәңдәге кешеләр йөрәгенән һалҡынлыҡ бөркөлгәндә йөрәгең утын яндырмайһың? Ҡараңғылыкта кемдеңдер килеп ут яндырғанын көтөп ултырғансы, ул утты үҙең өсөн дә, башҡалар өсөн дә үҙең яндырыу яҡшыраҡ түгелме? Ул саҡта бит алдыңдағы юлды һин дә күрәһең, башҡалар ҙа күрәсәк һәм һинең менән бергә етәкләшеп уҙасаҡ. Һалҡында кемдер килеп йылытҡанды көтөп ултырғансы, йөрәк усағыңды тоҡандырып, үҙең дә йылынып, башҡаларҙы ла йылытыу яҡшыраҡ бит, ул саҡта һинең йылыңда йылынған йөрәктәрҙән бер ваҡытта ла һалҡын бәрмәйәсәгенә үҙең дә инанырһың..."**

1 582218 911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 4 ғинуар 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5387
Заказ 5157